ИЖТИМАҒИ-СӘЙӘСИ-МӘҘӘНИ ГӘЗИТ

# Киске Өфө

13-19 июнь (һөтәй) 2025

№23 (1167)

kiskeufa.ru • 2002 йылдан башлап сыға • һатыуҙа хаҡы ирекле

## БЫЛ һАНДА УҠЫҒЫҘ:

**Берҙәмлек -**
Рәсәйҙең яҡты йондоҙо

6

**Милли байрамдарыбыҙ -**
асылыбыҙҙың сағылышы

8-9

**Радионың тәрбиәүи көсөнә...**
бөгөнгө балаларҙы ла йәлеп итәйек

11

**Төбәктең ер-һыуының...**
боронғо атамалары боҙолмаһын!

11

@KISKEUFA
Беҙҙең Телеграм каналға рәхим итегеҙ!
смартфон камераһын төбә

*Мөхтәрәм уҡыусыларыбыҙ! Июнь аҙағына тиклем 2025 йылдың икенсе яртыһы өсөн ПР905 индекслы "Киске Өфө"гә республиканың һәр ҡалаһында-ауылында яҙыла алаһығыҙ, хаҡы - 995 һум 76 тин. Гәзитебеҙгә яҙылып, квитанцияларын редакцияға ебәргәндәр араһынан кемдәрҙер матур ғына китаптарға лайыҡ буласаҡ икәнен дә онотмағыҙ.*

**МӨХӘРРИРИӘТ.**

## ӘЙТ, ТИҺӘГЕҘ...

**Был аҙнала, 14 майҙа, БР матбуғат һәм мәғлүмәт көнөн байрам итәбеҙ. Совет осоронда ла, унан һуң да ошондай милли ваҡытлы баҫмалар нәшере республика етәкселегенең иғтибар үҙәгендә булды. Әммә бөгөн башҡорт журналистарын борсолдорған, хатта ки хәүефләндергән төп проблема - гәзит-журналдарға яҙылыусы милләттәштәребеҙ йылдан-йыл кәмей бара. Ваҡыт үтеү менән ҡағыҙға баҫылған ваҡытлы матбуғат юҡҡа сыҡмаҫмы һуң?**

***Меңәүәрә БОХАРБАЕВА, педагог-ветеран, БР мәғариф отличнигы, Хәйбулла районы Аҡъяр ауылының Ағинәйҙәр клубы етәксеһе:*** Беҙҙең кеүек башҡорт милли баҫмаларынан айырылмағандар барҙа, әлбитттә, улар йәшәйәсәк әле. Элегерәк мәктәптә уҡытҡанда өйгә ҡосаҡ-ҡосаҡ гәзит-журнал килә ине. Бөгөн, үкенескә, уларҙың бөтәһенә лә яҙылыу мөмкин түгел, шулай ҙа ике телдә лә үҙебеҙҙең "Хәйбулла хәбәрҙәре"нән ("Хайбуллинский вестник") башлап, ҡайһы бер республика гәзиттәренә, әлбиттә, "Киске Өфө"гә лә, үҙәк баҫмаларҙан "АиФ" аҙналығына яҙылмай ҡалғаныбыҙ юҡ. Ейәндәребеҙ өсөн, әлбиттә, "Аҡбуҙат" менән "Аманат" журналдары ҡилеп тора. Быларҙың бөтәһенең дә онлайн варианттары бар, ләкин мин интернеттан уҡыуға ҡарағанда, ҡағыҙ баҫмаларҙы өҫтөн күрәм.

Үҙебеҙ уҡып сыҡҡас, гәзиттәребеҙҙе йыйыштырып һалып торабыҙ, сөнки беләбеҙ: беҙҙән һуң уларҙы 18 йәшлек ейәнебеҙ Арыҫлан да уҡыясаҡ. Унын уҡырға әүәҫлеге мине һөйөндөрә, сөнки күп уҡыған - күпте белгән, тигәндәй, ил, республика тормошо, милләтебеҙ мәсьәләләре менән хәбәрҙар була, тарихи темаларға мәҡәләләр һәм очерктар унын тормошҡа ҡарашын киңәйтә, зиһенен үткерләй, илһөйәрлек тойғоһо тәрбиәләй. Юҡҡа бит, бөгөнгө йәш быуын тарих мәсьәләләрендә бик һай йөҙә башланы түгелме? Тарих дәреслектәре хаҡында ҡыҙыу-ҡыҙыу бәхәстәр юҡҡа түгел ине бит. Хатта ил Президенты Владимир Путин был мәсьәләгә әллә нисә тапҡыр әйләнеп ҡайтты һәм дәреслектәрҙе тормош хәҡиҡәтенә ярашлы, ватаныбыҙ тарихын боҙмай, тулы һәм уҡырға йәлеп итерлек кимәлдә яңынан яҙыу, йөкмәткеләрен камиллаштырыу бурысын ҡуйғайны.

Совет осоронда тәрбиәләнгән бөгөнгө өлкән быуын вәкилдәренең ваҡытлы матбуғат уҡыуға әүәҫлеге яҡшы ғәҙәттәрҙең береһе булараҡ, шул тиклем аңыбыҙға һеңгән, атай-әсәйҙәребеҙҙән күреп үҫкәнгә күрә лә, бөгөн, үҫешкән интернет заманында ла хатта беҙ гәзиттәрҙән айырыла алмайбыҙ. Уҡылған баҫмаларҙы кемдәрҙер ҡәҙерләп, төпләмә итеп йыя, ә иптәшем уларҙы 80 йәшлек ағаһына илтеп бирә, сөнки өлкән йәштәгеләр гәзит-журналды уғата ярaтып, ихласлап уҡый. Гәзитһеҙ өй - йәнһеҙ өй, тип иҫәпләйем мин. Гәзит килһә, өйгә йәм, күңелгә йылылыҡ өҫтәлә, көтөп алынған ҡәҙерле бер ҡунаҡ кеүек бит ул!

## АФАРИН!

# "УРАЛ БАТЫР" ЭПОСЫ...

## дәреслектә лә булһын!

**Башҡортостан Башлығы Радий Хәбиров Указы менән булдырылған "Урал батыр" эпосы көнөндә, 8 июндә, республикала "Урал батыр" эпосын башҡарыусы йәш сәсәндәрҙең 27-се төбәк-ара конкурсы башланды. Республиканың Мәғариф һәм фән министрлығы сәсәндәр мәктәбен тергеҙеү һәм үҫтереү, "Урал батыр" эпосын популярлаштырыу, башҡорт халыҡ ижадының иң яҡшы өлгөләрен һаҡлау һәм таратыу маҡсатында йыл һайын "Урал батыр" эпосын башҡарыусы йәш сәсәндәр конкурсын ойоштора. Был юлы йәш сәсәндәр Күмертау ҡалаһында, Башҡортостандың Беренсе Президенты Мортаза Рәхимов исемендәге 3-сө республика Башҡорт гимназия-интернатында йыйылды. Конкурста республиканың һәм Ырымбур өлкәһенең мәктәпкәсә һәм дөйөм белем биреү ойошмаларынан 47 уҡыусы, 27 фольклор коллективы ҡатнашты һәм өс көн буйына "Урал батыр" эпосын яттан һөйләне, эпостан өҙөктәр сәхнәләштерҙе.**

(Дауамы 5-се биттә).



Сара сиктәрендә үткәрелгән "Урал батыр образы" конкурсында ҡатнашыусылар.

12+

✓ *Интернеттың файҙаһынан башҡа зыяны ла етерлек: ул торғаны менән сүп ояһына әйләнә башланы, буш, мәғәнәһеҙ, алдаҡҡа - фейкҡа ҡоролған, еңел-елпе мәғлүмәттәр хаттин ашҡан, ә был уйлы кешеләрҙе үҙенән-үҙе ялҡытасаҡ.*



КӨН ТЕМАҺЫ

# ТАҒЫ ЛА ҺӘЙКӘЛ ТУРАҺЫНДА



**Башҡортостанда Салауат Юлаев һәйкәлен реставрациялау башлана. 30 июндә һәйкәл алдындағы майҙан ябыла. Скульптураны Өфөләге махсус цехҡа реставрацияға алып китәләр. Яңыртылған һәйкәлдә тантаналы асыу 2027 йылдың 11 октябренә планлаштырылған.**

Реставраторҙарҙы бик ҡатмарлы һәм ҙур эш көтә. Проект авторҙарының береһе, юғары категориялы реставратор-рәссам, Дәүләт реставрация ғилми-тикшеренеү институтының металл эштәрҙе реставрациялау бүлеге мөдире Павел Котельников был эштең үҙенсәлектәре тураһында һөйләне. Уның фекеренсә, Салауат Юлаев һәйкәле - Башҡортостандың ғына түгел, ә бөтә Рәсәйҙең символы. Ваҡытында реставрация эштәре башланыуы бик яҡшы, сөнки бер ни ҙә эшләнмәһә, һәйкәлде юғалтыу ихтималы ҙур ине.

- Был һәйкәлдең тарихы үҙе лә уникаль. Скульптор Сосланбәк Тавасиевтың идеяһы һуғыш йылдарында уҡ тыуған, ә 1967 йылда тормошҡа ашырылған. Һәйкәлде Ағиҙел йылғаһы ярында ҡуйыу бик уңышлы. Масштабы ла таң ҡалдыра - ҙур, шул уҡ ваҡытта сәнғәт ҡүҙлегенән ҡарағанда бик динамик, тере. Миңә бик оҡшай. Хәҙер лак-буяу ҡатламының боҙолоуын, аттың түш өлөшөнөң юҡлығын, төрлө йылдарҙа буялған урындарҙы күрергә була. Һуңғы тапҡыр һәйкәлде 2014 йылда буяғандар. Төрлө йылдарҙа төҫтәре лә үҙгәргән: көрән, ҡара, йәшел, һоро булған. Был монумент, һәр әйбер кеүек, даими иғтибар һәм ҡарау талап итә. Салауат Юлаев һәйкәленә ярты быуаттан ашыу ваҡыт, ул һәр саҡ асыҡ һауала, төрлө һауа шарттарында тора. Былар барыһы ла һәйкәлдең торошона, күренешенә йоғонто яһай.

Реставратор һүҙҙәренсә, алда ҙур һәм техник яҡтан ҡатмарлы эш көтә.

- Айырыуса каркас менән эшләүгә иғтибар кәрәк. Күп нәмә эшләргә тура киләсәк: таҙартыу, эске буяуҙы, тутыҡты алыу, ярыҡтарҙы төҙәтеү. Инженер күҙлегенән ҡарағанда, сәнғәт әҫәрҙәре менән эшләү бик ҡатмарлы, сөнки унда стандарт деталдәр юҡ. Салауат Юлаев һәйкәле пазл һымаҡ: болтлы тоташтырмалар һәм таяныс каркас бар. Һәйкәлде эстән таҙартыу, етешмәгән өлөштәрҙе монтажлау ҡыйын буласаҡ. Мин суйындан эшләнгән шундай ҙур һәйкәл күргәнем юҡ. Реставраторҙың мөһим бурысы - үҙенән бер нәмә лә өҫтәмәү, автор уйлағанса, деталдәрҙе яңыртыу, - ти реставратор-рәссам.

**Роман ЯКИМЧУК.**

ӘЙТ, ТИҺӘГЕҘ...

?

***Был аҙнала, 14 майҙа, БР матбуғат һәм мәғлүмәт көнөн байрам итәбеҙ. Совет осоронда ла, унан һуң да ошондай милли ваҡытлы баҫмалар нәшере республика етәкселегенең иғтибар үҙәгендә булды. Әммә бөгөн башҡорт журналистарын борсолдорған, хатта ки хәүефләндергән төп проблема - гәзит-журналдарға яҙылыусы милләттәштәребеҙ йылдан-йыл кәмей бара. Ваҡыт үтеү менән ҡағыҙға баҫылған ваҡытлы матбуғат юҡҡа сыҡмаҫмы һуң?***

***Артур ДӘҮЛӘТБӘКОВ, "Йәшлек" гәзитенең баш мөхәррире:*** Быңдай хәлдәр, ошондай хәүефләнеүҙәр тарихта ла булған ул. Бер заман кино төшөрөү һәм күрһәтеү бөтөн донъяла шул тиклем ныҡ тарала башлай, элеккесә әйткәндәй, синематографтар асыла, күпләп кинотеатрҙар төҙөлә, халыҡ киноға эркелеп йөрөй. Ошо ваҡытта бик күп зыялылар, кино булғас, тамашасылар театрҙарға йөрөмәй башлар, тип, театр яҙмышы өсөн ҡайғырған. XX быуаттың икенсе яртыһында донъяның бик күп илдәрендә телевидение ылдам үҫә, төҫлө аҡлы-ҡаралы, һуңынан төҫлө телевизорҙарҙан бик ҡыҙыҡлы тапшырыуҙар, кинофильмдар күрһәтелә. Кинофильм төшөрөүсе режиссерҙарҙың, киноактерҙарҙың нисек хәүефләнгәнен шул осор кешеләре онотмағандыр әле: кешеләр кинофильмдарҙы өйҙәрендә диванда ултырып ҡына ҡарай алғас, кинотеатрҙар ябылыр, тип ҡурҡалар. Әммә XXI быуатта ла миллионлаған кешеләр театрҙарға, концерт залдарына ихлас йөрөй, ә ҡайһы бер кинофильмдар прокатсыларға йөҙәр миллионлаған табыш килтерә.



Быуа хәҙер гәзит-журналдарға ла сират етте. Сәбәбе аңлашыла: кешеләр компьютерҙар, төрлө гаджеттар, төрлө электрон сараларҙы киң ҡуллана, интернет селтәрҙәре модаға инде. Әммә интернеттың файҙаһынан башҡа зыяны ла етерлек: ул торғаны менән сүп ояһына әйләнә башланы, буш, мәғәнәһеҙ, алдаҡҡа - фейкҡа ҡоролған, ялтырауыҡ, еңел-елпе мәғлүмәттәр хаттин ашҡан, ә был уйлы, зыялы кешеләрҙе үҙенән-үҙе ялҡытасаҡ. Ошо маүығыуҙар тиҙҙән бүҫкәрер, киләсәктә барыбер баҫма китаптар, гәзит-журналдар кеше күңеленә яҡыныраҡ булыр, тип уйлайым.

Гәзит-журналдар бар замандарҙа ла донъя хәлдәрен, кеше һәм йәмғиәт тормошон етди сағылдырыуға ҡоролдо, хәҙер ҙә шулай. Журналистарҙың күбеһе аҡты ҡаранан яҡшы айырырға өйрәнгән, уҡыусыларыбыҙҙың ышанысын аҡларға тырыша. Проблемалар юҡ түгел, әммә уларҙы халҡыбыҙ менән бергәләп хәл итә алырбыҙ, тим. Бигерәк тә гәзит-журналдарға йәштәрҙең иғтибарын артытырыға, гәзит-журнал уҡыуҙы модаға индерергә кәрәк. Ошо йәһәттән бик кешелле юлын тапҡан французҙар: улар йәштәрҙе ҡайһы бер баҫмаларға бушлай яҙҙырҙылар! Берәй ҡасан беҙҙә лә балаларға, йәштәргә баҫмаларҙы бушлай яҙҙырып, әүрәтергә, ылыҡтырырға булыр, тип уйлайым. Ә финанс яғынан етешерәк йәшәй башлаһаҡ, китап һатып алыу, ваҡытлы матбуғатҡа яҙылыу күнегелгән күренешкә әйләнер.

***Фаил ФӘТХЕТДИНОВ, "Ҡыҙыл таң" гәзитенең баш мөхәррире:*** Башҡортостанда милли матбуғатыбыҙҙың үҫеше өсөн күп тиҫтә йылдар дауамында мөмкин булғандың барыһы ла эшләнде. Балалар, йәш үҫмерҙәр, йәштәр, ҡатын-ҡыҙҙар, ололар өсөн күп төрлө баҫмалар сығарыла. Быңа әле генә Өфөлә "Китап" байрамы үтте, күргәҙмәләрҙә, тирмәләрҙә ниндәй генә китап юҡ ине. Гәзит-журнал редакциялары ла үҙ баҫмаларын күрһәтте, уларға яҙылыуҙы ойошторҙо.

Китаптар баҫылып тора икән, гәзит-журналдарыбыҙ сығып тора икән, уларҙы уҡыусылар бер ҡасан да бөтмәйәсәк. Эйе, хәҙер заман ныҡ үҙгәрҙе, кешеләр үҙҙәренә кәрәкле мәғлүмәтте төрлө юлдар менән таба беләү, ҡағыҙ баҫмаларҙан башҡа, төрлө электрон мәғлүмәт саралары бихисап, һуңғылары социаль модаға әүерелде. Әммә һәр бер мәғлүмәт сараһының үҙ мөмкинлектәре, үҙ маҡсаттары бар, улар үҙенсә йәшәй һәм үҫешә. Иҫ киткес технологиялар уйлап сығарылыуы, әлләнindәй яңы мәғлүмәт системалары барлыҡҡа килеүе мөмкин. Тик иң ышаныслыһы, йәшәйешебеҙҙе иң дөрөҫ сағылдырғаны - киң матбуғат саралары. Шул уҡ ваҡытта интернет селтәрҙәрендә, гаджеттарҙа урынлаштырылған мәғлүмәттәрҙе бер кем дә тикшермәй, бер мөхәррир ҙә редакторламай - нимә теләһәләр, шуны яҙалар. Ә журналист үҙе яҙғаны өсөн редакция алдында ғына түгел, халыҡ алдында ла яуаплы. Журналистика - үҙе бер оло ижад өлкәһе. Журналист оҫталығы мөһим, уҡыусыларҙы яҙмаларың менән ҡыҙыҡһындыра алһаң, һине уҡыясаҡтар. Ғөмүмән, вузда уҡып сығып ҡына журналист була алмайһың, тормош тәжрибәһе, үҙеңдә камиллаштыра алыу фарыз. Журналист булып тыуырға кәрәктер ул.

***Тимер НИӘТШИН, шағир, прозаик, публицист, йәмғәт эшмәкәре:*** Бөгөн уҡырға әүәҫ халыҡтың байтаҡ өлөшөн ваҡытлы матбуғат баҫмаларының киләсәге борсой, сөнки интернеттың киң ҡолас менән үҫеш алыуы теләһә ниндәй әҙәбиәткә, фәнни-популяр мәҡәләләргә, донъя селтәрендәге яңылыҡтарға юл асты һәм был хәл гәзит-журнал менән китаптарҙың ҡағыҙ вари-

## Н И М Ә ? Ҡ А Й Ҙ А ? Ҡ А С А Н ?

✓Башҡортостан Башлығы Радий Хәбиров алкоголһеҙ энергетиктар һатыуҙы тыйыу тураһында законға ҡул ҡуйҙы. Закон Башҡортостан Дәүләт Йыйылышы - Ҡоролтай депутаттары башланғысы менән ҡабул ителде. Ул 2025 йылдың 1 сентябренән көсөнә инергә тейеш. Закон мәктәптәр, университеттар, уҡыу һәм дауалау учреждениелары, театрҙар, физик культура һәм спорт учреждениелары эргәһендә урынлашҡан сауҙа нөктәләрендә алкоголһеҙ, шул иҫәптән энергетик эсемлектәрҙе һатыуҙы тулыһынса тыйыуҙы күҙ уңында тота. Ул республика халҡының әхлағын, һаулығын, хоҡуҡтарын һәм законлы мәнфәғәттәрен яҡлауға йүнәлтелгән, тиелә документта.

✓8 июндә, "Урал батыр" эпосы көнөндә Башҡортостан Республикаһының Милли музейында эпостың машинкала яҙылған тексы ингән китап Евразия кәсмә цивилизациялар музейына тапшырылды. Ағымдағы йылдың 30 майында III "Китап байрам" халыҡ-ара китап йәрминкәһенән асыу тантанаһында Башҡортостан Республикаһы Башлығы Радий Хәбиров Башҡортостан Республикаһының Милли музейына "Урал батыр" эпосының факсимиль күсермәһе баҫылған уникаль китапты ваҡытлыса һаҡлауға тапшырғайны. Эпостың машинкала яҙылған версияһы күренекле башҡорт мәғрифәтсеһе Мөхәмәтша Буранғоловтың 1910 йылда сәсәндәр Ғәбит Арғынбаев һәм Хәмит Әлмөхәмәтов һүҙҙәренән яҙып алған тексының баҫтырылған нөсхәһе булып тора.

✓Өфөлә үткән "Әйҙә, уйнарға!" Бөтә Рәсәй уйынсыҡтар һәм уйындар фестивале сиктәрендә 8 июндә башҡорт әҙәбиәтенең бөйөк ҡомартҡыһы - "Урал батыр" эпосына арналған байрам да билдәләнде. Был көндө төп сәхнәлә Сибай башҡорт драма театрының "Самрау батшаның бүләге" спектакле ҡуйылды, Мәжит Ғафури исемендәге Башҡорт дәүләт академия драма театры "Урал батыр" эпосы нигеҙендә ҡуйылған "Музыкаль әкиәттәр буйынса" тип аталған театрлаштырылған тамаша күрһәтте. Шулай уҡ республиканың Милли музейында үткән түңәрәк өҫтәлдә көнүҙәк мәсьәләләр тикшерелде һәм эпостың әһәмиәте тураһында уй-фекерҙәр яңғыраны.

✓Башҡортостан Башлығы Радий Хәбиров 2025 йылғы сығарылыш уҡыусыларына Берҙәм дәүләт имтиханында яҡшы һөҙөмтәләр өсөн рәхмәт әйтте һәм артабанғы имтихандарҙа уңыштар теләне. Билдәләнеүенсә, 2775 кеше химиянан һынау тотҡан, 68 уҡыусы 100 балл туплаған, ә быltыр ошо предметтан 52 уҡыусы йөҙ балға яҙған. Ә 730 уҡыусы 81 һәм унан юғарыраҡ балл алған. Тарихтан 1538 кеше БДИ яҙған. Өс уҡыусыныҡы - 100 балл. 251 кеше 81 һәм унан юғарыраҡ балл йыйған. Әҙәбиәт буйынса 536 кеше имтихан тапшырған. Береһе 100 балл туплаған, 32 уҡыусының иһә 81 балдан күберәк.

✔ *"Ҡарағыҙ әле, бер генә иҫерек кеше лә юҡ. Айыҡ һабантуйҙар тураһында ҡарар ҡабул иткәндә ҡайһы берәүҙәр был башланғысты бәхәсле тип иҫәпләй ине. Әммә уның уңышлы булыуын күрәбеҙ", - тине Радий Хәбиров*



ҠЫҪҠАСА

# ҠЫРАҒАЙ ТУРИЗМ...

**Әбйәлил районы биләмәһендә башлыса бырау лау һәм геофизик эштәрҙән торған геологоразведка башҡарыуҙың тирә-яҡ мөхиткә йоғонтоһо аҙ, тип билдәләй Башҡортостандың тәбиғәттән файҙаланыу һәм экология министры вазифаһын башҡарыусы Данил Шәрәфетдинов.** "Был эштәр файҙалы ҡаҙылмаларҙың булыу-булмауын, уларҙың сифатын һәм сәнәғәт ҡиммәтен баһалау өсөн үткәрелә. Ер аҫты байлыҡтарын файҙаланыусыларҙың эшмәкәрлеген артабан Росприроднадзорҙың төбәк идаралығы контролдә тота", - ти ул. Рәсәй Фәндәр академияһы Өфө федераль тикшеренеү үҙәге етәксеһе Василий Мартыненко һүҙҙәренсә, уникаль биотөрлөлөккә айырым яҡтылыҡтарҙы эшкәртеү түгел, ә тәртипкә һалынмаған туризм нығыраҡ зыян килтерә. "Бөгөнгө көндә ҡырағай туризм ныҡ үҫешкән. Күп кенә туристар тау башына йәйәү менергә теләмәй, ә квадроциклдарҙа йөрөүҙе хуп күрә. Ә тәғәрмәс эҙҙәре тиҫтәләгән йылдар буйына бөтмәй. Шулай уҡ хәҙер төрлө миниотель, бунгало, ҡунаҡ йорттары төҙөлгән, әммә улар үҙәк канализацияға тоташтырылмаған, шуға күрә ҡалдыҡтар күлгә ағып төшә. Элегерәк Яҡтыкүл иң таҙа һыу яҡтылыҡтарының береһе тип иҫәпләнһә, бөгөн уның статусы шик тыуҙыра", - тине эксперт.

✔ **Дәүләт Йыйылышы - Ҡоролтай депутаттары "Башҡортостан республикаһында кинематографияға дәүләт ярҙамы тураһында "БР законының 4-се статьяһына үҙгәрештәр индереү тураһында" закон ҡабул итте.** "Закон кинематографияға дәүләт ярҙамы өлкәһен киңәйтә, - тип хәбәр итте Дәүләт Йыйылышы рәйесе Константин Толкачев. - Халҡыбыҙ өсөн традицион рухи ҡиммәттәрҙе трансляциялаған, тамашасыла әхлаҡ тәрбиәләгән фильмдар төшөрөү уның төп йүнәлештәренең береһе буласаҡ". Закон тексына ярашлы, дәүләт ярҙамы балаларҙы һәм үҫмерҙәрҙе тәрбиәләүгә, сәләмәт тормош рәүешен пропагандалауға һәм Башҡортостан халҡында иж тимағи әһәмиәтле ҡиммәттәр формалаштырыуға, шулай уҡ өлкән быуын кешеләренә, инвалидтарға, мәктәпкәсә йәштәге балаларға, мәктәп-интернаттарҙа һәм балалар йорттарында тәрбиәләнеүселәргә кинофильмдар күрһәтеү менән бәйле социаль функцияларға йүнәлтелә.

✔ **Башҡортостан Ҡоролтайы депутаттары республикала ишле ғаиләләргә дәүләт ярҙамы тураһында законға үҙгәрештәр индерҙе.** Республика парламенты спикеры Константин Толкачев һүҙҙәренсә, яңы закон бәлиғ булмаған һәм инвалид балалар тәрбиәләгән күп балалы ата-әсәләргә эшкә урынлашырға ярҙам итеүҙе күҙ уңында тота. "Башҡортостанда эш эҙләүҙә ҡыйынлыҡтар кисергән граждандарға ваҡытлыса хеҙмәт урыны биреүҙе ойоштороу буйынса эш алып барыла. Хәҙер ошондай граждандарға ваҡытлыса эш тәү сиратта бирелә", - тип белдерҙе ул. Билдәләнеүенсә, кескәй һәм проблемалы сабыйҙарҙың ата-әсәһенә тулы кимәлдә эшләү һәм карьера үҫеше бик ауыр бирелә, был уларҙың тормош сифатында ла сағыла. "Ваҡытлыса эшкә урынлашыу ғаиләләрҙең хәлен яҡшыртырға мөмкинлек бирә. Финанс тотороҡлолоғо шарттарында ата-әсәләр балалары хаҡында нығыраҡ хәстәрлек күрә ала", - тине Башҡортостан Дәүләт Йыйылышы рәйесе.

ТӨРЛӨҺӨНӘН

# ХӘЙБУЛЛАЛА...

**Хәйбулла районына эш сәфәре барышында Башҡортостан Башлығы Радий Хәбиров Аҡъяр ауылындағы "Уңыш" стадионында үткән район һабантуйында булды.**



Төбәк етәксеһе һабантуйҙың тематик майҙансыҡтарында булды, шулай уҡ ҡул оҫталарының йәрминкәһен ҡараны. "Балта" коворкинг үҙәге етәксеһе Рәмил Билалов ишектәр, өҫтәлдәр, ултырғыстар, баҫҡыстар һәм башҡа ағас әйберҙәр эшләүе хаҡында һөйләне. 2022 йылда ул "Йыл эшҡыуары" төбәк конкурсының "Халыҡ-художество кәсептәре өлкәһендә йылдың иң яҡшы эшҡыуары" номинацияһында еңеүсе була. Ҡул эштәре оҫтаһы Рәйхана Сурина кәзә мамығынан данлыҡлы Хәйбулла шәлдәрен бәйләү серҙәре менән уртаҡлашты. Ә оҫтабикә Светлана Ибраһимова башҡорт милли кейемдәре, баш кейемдәре һәм ҡатын-ҡыҙ биҙәүестәре коллекцияһын күрһәтте. Урындағы эшҡыуар Илдар Юнысов ҡайындан картиналар эшләү менән шөғөлләнә. Уның был ижад емештәрен илдең башҡа төбәктәренән дә һатып алалар. Аҡъярҙа билдәле һәм популяр икмәкханаларҙың береһе "Ҡүстәнәс" етәксеһе Арыҫлан Байгусҡаров Сибайҙа ла сауҙа урыны барлыҡҡа килеүен әйтте. Киләсәктә ул үҙенең франшизаһын булдырырға ниәтләй.

Һабантуйҙың тағы бер тематик зонаһы - Хәйбулла районы ауыл биләмәләре тирмәләре. Был майҙансыҡта Әбеш ауыл Советы башлығы Таһир Юнысов республика Башлығының ҡушыуы буйынса биш тораҡ пунктта кҫсмә элемтә барлыҡҡа килеүен, уларҙың биләмәһендә мобиль фельдшер-акушерлыҡ пункты ҡуйылыуын, хакимиәт составына ингән ауылдарҙың ике тапҡыр "Айыҡ ауыл" республика конкурсында еңеүсе булғанын һөйләне.

Төбәк етәксеһе аҙаҡтан журналистар менән аралашҡанда күмәк халыҡ ҡатнашлығында үткән сараларҙа эскелек булмауы мөһимлеген билдәләне. "Ҡарағыҙ әле, бер генә иҫерек кеше лә юҡ. Айыҡ һабантуйҙар тураһында ҡарар ҡабул иткәндә ҡайһы берәүҙәр был башланғысты бәхәсле тип иҫәпләй ине. Әммә уның уңышлы булыуын күрәбеҙ", - тине Радий Хәбиров һәм шулай тип тә өҫтәне: "Мөмкинлек булғанда республиканың алыҫ райондарына сығырға тырышам. Был муниципалитетта ла үҙебеҙ хәл итергә тейешле мәсьәләләр бар, беҙ уларҙы етәксе менән тикшерҙек. Юлдарға бәйле хәл ҡатмарлы. Халыҡ район мәҙәниәт йорто төҙөүҙе лә һорай. Ғәҙел тәнҡитләйҙәр: районда 28 мең кеше йәшәй, ә бындай учреждение юҡ. Беҙ ошо объекттың тау сәнәғәтселәренең инвестиция программаһының бер өлөшө булыуын теләйбеҙ. Дөйөм алғанда, район халҡы татыу йәшәй, мин быны өсөн урындағы идара итеү командаһына рәхмәтлемен".

# ӘЙҘӘГЕҘ, УЙНАРҒА!

**5-8 июндә Өфөнөң Совет майҙанында икенсе тапҡыр "Әйҙә, уйнарға!" Бөтә Рәсәй уйынсыҡтар һәм уйындар фестивале уҙғарылды.**

Башҡортостан Башлығы Радий Хәбиров "Әйҙә, уйнарға!" Бөтә Рәсәй фестиваленең пленар дискуссияһында ҡатнашты. Сара сиктәрендә власть органдары етәкселәре, эксперттар һәм тауар етештереүселәр балалар тауарҙары индустрияһы эшенең төп йүнәлештәрен тикшерҙе. Пленар дискуссияның темаһы: "Киләсәк өсөн уйын: милли үҫеш маҡсаттарына өлгәшеүгә сәнәғәт нисек булышлыҡ итә".

Ул көндәрҙә Совет майҙаны гөрләп торҙо. Быйыл был байрам илдең 10 төбәгенән 150-ләп балалар уйынсыҡтары етештереүселәрҙе йыйҙы. Уйынсыҡтар ҡуйылған тирмәләрҙән балаларын етәкләгән атай-әсәйҙәр өҙөлмәне. Уйынсыҡтар ғына түгел, уйындар ҙа йәлеп итте балаларҙы. Мәҫәлән, "Әйҙә, уйнарға!" Бөтә Рәсәй уйынсыҡтар һәм уйындар фестивалендә Республика халыҡ ижады үҙәге балаларҙы башҡорт халыҡ уйындары донъяһы менән таныштырҙы. Ҡатнашыусылар "Аҡ тирәк, күк тирәк", "Тирмә", "Көршәк ватыу" кеүек халыҡ уйындарына ҡушылды. Балалар уҡтан атыу буйынса ярышта ҡатнашып, үҙҙәренең оҫталығын һәм мәргәнлеген тикшерҙе. Бынан тыш, кескәй тамашасылар өсөн "Һыбайлылар", "Арҡан тартыу" эстафеталары, ҡалаҡҡа йомортҡа һалып йүгереү, "Йәшерәм яулыҡ", "Күҙ бәйләш" уйындары, шулай уҡ "Минең кеүек эшлә!" музыкаль уйыны ойошторолдо."Балаларҙы традициялар менән таныштырыу баланың шәхесен формалаштырыуҙа, үҙ мәҙәниәтенә хөрмәт уятыуҙа һәм илһөйәрлек тәрбиәләүҙә ҙур роль уйнай. Милли уйындар һәм дәрестәр мөһим ҡиммәттәрҙе, белемде һәм оҫталыҡты йәш быуынға тапшырырға ярҙам итә. Бында физик әүҙемлек тә үҫешә, етеҙлек, зирәклек, иғтибарлылыҡ үҫешә", - тип билдәләне Республика халыҡ ижады үҙәге директоры Салауат Кирәев.

Шулай уҡ "Әйҙә, уйнарға!" фестивалендә ҡатнашыусылар Сибайҙан Креатив индустриялар мәктәбе (мәктәп 2024 йылдың октябрендә Камил Вәлиев исемендәге Сибай сәнғәт колледжында асылды. Башҡортостанда ул ошондай өс мәктәптең береһе булып тора) майҙанындағы уйындарҙы ла ҡыҙыҡһынып күҙәтте. Мәктәп вәкилдәре үҙҙәре эшләгән паздар һәм башваткыстар тәҡдим итте. Экспозицияға ысын хитҡа әүерелгән үҫтереүсе уйынсыҡтар серияһы индерелгәйне. Уларҙың береһе - Башҡортостандың лазер менән һырлап яһалған үҙенсәлекле пазл-картаһы. Был ябай башваткыс ҡына түгел, ә балаларға тыуған яҡтың географияһын нығыраҡ белергә ярҙам иткән уйын. Рәсәй картаһы пазлы ла шундай ысул менән эшләнгән. Ә башҡорт орнаменттары менән түңәрәк башваткыстар һәм Сибай ҡалаһының 70 йыллығына ҡарата яһалған сылтыраҡтар 3D-принтерҙа баҫылған. "Балалар үҙ идеяларының әһәмиәтле булыуын күрһендәр ине. Уйынсыҡ рәхәтләнеп уйнау ғына түгел, ә үҫенде күрһәтеү, ижад итеү, үҫешеү һәм хатта аҡса эшләү мөмкинлеге лә", - тип билдәләне Креатив индустриялар мәктәбе етәксеһе Резеда Яхина.

Ҡыҫҡаһы, "Әйҙәгеҙ, уйнарға!" сараһы иң юғары баһаға, иң матур маҡтау һүҙҙәренә лайыҡ булды. "Бынамын тигән ҡала, бынамын тигән һауа торошо, бынамын тигән мөхит! Рәхмәт, Өфө! Рәхмәт, Башҡортостан!" тине ситтән килгән ҡунаҡтар ҙа. Ә Совет майҙанында концерт менән сығыш яһауын билдәле музыкант һәм композитор Дмитрий Маликов был сараны "илдә аналогы булмаған уникаль проект" тип атаны.

## Н И М Ә ? Ҡ А Й Ҙ А ? Ҡ А С А Н ?

✔Ағиҙел ҡалаһында 2025 йылдың 1 июненән баланы тыуған ғаиләләргә шәхси йорт төҙөү өсөн бушлай ер участкаһы бүленә. Был хаҡта социаль селтәрҙәге сәхифәһендә ҡала мэры Денис Ирназаров хәбәр итте. Был льготаға Ағиҙелдә даими теркәлгән кешеләр иҫәп тота ала. Сабыйҙар ҙа урындағы ЗАГС-та теркәлергә тейеш. Ер алыу өсөн ир менән ҡатындың паспорттары, бала тыуыу тураһында таныҡлыҡ күсермәләре, сығымдарҙы ҡаплау өсөн ғариза һәм ер участкаһын һатып алыуҙы раҫлаған документтар талап ителә. Программа тураһында тулыраҡ мәғлүмәт алыу өсөн телефон: +7 (347-31) 2-82-15.

✔Башҡортостанда йыл башынан 256 етем бала торлаҡ һәм сертификаттар менән тәьмин ителде, тип хәбәр итте республиканың төҙөләш һәм архитектура министры вазифаһын башҡарыусы Артем Ковшов үҙенең телеграм-каналында. Етемдәр 45 ҡала һәм районда үҙ фатирын һәм сертификаттар алды. "Ошо категорияға ҡараған балаларҙы торлаҡ менән тәьмин итеү өсөн барлыҡ сараларҙы күрәбеҙ. Был эшебеҙҙең өҫтөнлөклө йүнәлеше булып тора, - тип билдәләне Артем Ковшов. - 2025 йылда әлеге маҡсатҡа 2,8 миллиард һум ҡаралған. Аҡса 749 етем баланы торлаҡ йәки сертификаттар менән тәьмин итергә мөмкинлек бирә".

✔"Тукланыу үҙәге" яуаплылығы сикләнгән йәмғиәте - Башҡортостан мәктәптәрендә һәм балалар баҡсаларында туҡланыуҙы төп ойоштороусыларҙың береһе. Ойошма "Һөҙөмтәле һәм конкурентлы иҡтисад" федераль проектында ҡатнаша, тип хәбәр итә Башҡортостан Хөкүмәтенең матбуғат хеҙмәте. "Федераль проектта ҡатнашыу беҙгә һаҡсыл технологиялар ҡулланылған яңы производство майҙансығын эшләтеп ебәрергә мөмкинлек бирә", - ти "Туҡланыу үҙәге"нең башҡарма директоры Вадим Әхмәҙуллин.

✔Башҡортостандан Владислав Волков ҡул һуғышы буйынса донъя чемпионы исемен яуланы. Спортсының еңеүе тураһында республика Хөкүмәте Премьер-министры урынбаҫары - спорт министры Руслан Хәбибов хәбәр итте. Турнир Төркиәнең Бурса ҡалаһында үтте. Унда донъяның 32 иленән спортсылар ҡатнашты. Владислав милли йыйылма команда составында 57 килограмға тиклемге ауырлыҡ категорияһында "Алыш" дисциплинаһында иң көслөһө тип танылды.

✔"Башинформ" мәғлүмәт агентлығы 2024 йылда Башҡортостандың иң күп өҙөмтә килтерелә торған киң мәғлүмәт сараһы тип танылды, тип хәбәр итә "Медиалогия" компанияһы. Рейтинг компанияның цитата килтереү индексына нигеҙләнеп төҙөлгән. Түгеләр рәтендә шулай уҡ Mkset (236,23) һәм Уфатайм (235,01) . Башҡортостан юлдаш телевидениеһы дүртенсе баҫҡысты биләй - 189,89. "Медиалогия" рейтингында беренсе урын "Башинформ"дың дөрөҫ мәғлүмәт сығанағы булып тороуын раҫлай", - тине Башҡортостандың Матбуғат һәм киң мәғлүмәт саралары агентлығы етәксеһенең беренсе урынбаҫары Елена Арямнова.

*АФАРИН!*

(Башы 1-се биттә).

# "УРАЛ БАТЫР" ЭПОСЫ...

## дәреслектә лә булһын!

**"Урал батыр" эпосын башҡарыусы йәш сәсәндәр конкурсы тураһында Ишембай ҡалаһы Әхмәтзәки Вәлиди исемендәге 2-се Башҡорт гимназия-интернатының башҡорт теле һәм әҙәбиәте уҡытыусыһы Фаягөл ӘМИРХАНОВА һөйләй:**

- Республикала "Урал батыр" эпосы көнө булдырылыуы - халҡыбыҙ өсөн баһалап бөткөһөҙ ваҡиға, ҙур шатлыҡ, әлбиттә. 2011 йылдан бирле "Урал батыр" эпосын башҡарыусы йәш сәсәндәр конкурсына балаларҙы әҙерләгән уҡытыусы булараҡ, был ваҡиғаның әһәмиәтен бик яҡшы аңлайым. Сөнки "Урал-батыр"ҙы белеү, һөйләү, ятлау - бик мөһим тәрбиә мәктәбе. Ул башҡорт теленә һөйөү, илһөйәрлек, ватансыллыҡ менән бергә, балала шәхси сифаттар - рух ныҡлығы, кешелеклелек, намыҫ тойғоһон да үҫтерә. "Урал батыр" эпосының фәлсәфәһенә төшөнгән уҡыусыла туған телен, әҙәбиәтен, мәҙәниәтен өйрәнеү уның зиһен, аң, күңел талабына әйләнә; әҙәплелек, иман көслө була уларҙа. Ундай бала тормош ауырлыҡтарына бирешмәй, рухи ҡиблаһын тиҙерәк таба. Күңелендә, зиһенендә мәшһүр эпостың ҡиммәттәрен һаҡлаған кеше башҡаса була ла алмай! Сөнки "Урал-батыр" эпосы - башҡорт халыҡ Ҡотон һаҡлаған бөйөк Китап, меңәр йылдар буйы йәшәү принцибын - Кеше булыу закондарын туплаған.

Әйтеп китеүемсә, байтаҡ йылдар "Урал батыр" эпосын яттан һөйләүсе йәш сәсәндәрҙең конкурсына уҡыусылар әҙерләйем. Биш уҡыусым конкурста абсолют еңеүсе исеменә лайыҡ булды. Конкурста ҡатнашыу уҡыусыны үҙ-үҙен еңергә лә өйрәтә. Ғәм халыҡ алдына сығып, талап буйынса жюри туҡтатҡан урындан яңылышмай, ваҡиғалар логикаһын боҙмай һөйләргә, герой-персонаждарҙың холоҡ-фиғелен, хис-тойғоһон биреү өсөн үҙендә эмоциональ көйләп тә өлгөрөргә, хәтерҙе аныҡ тоторға - быларҙың барыһына ла көс кәрәк! Шуғалыр ҙа ошо уҡ уҡыусылар башҡорт теле һәм әҙәбиәтенән олимпиадаларҙа ла еңеүсе, призерҙар булып, төрлө фәнни-эҙләнеү конференцияларында ла әүҙем ҡатнаша.

Мәшһүр эпосҡа күберәк уҡыусыларҙы йәлеп итеү - көнүҙәк проблема, тип иҫәпләйем. Әлеге ваҡытта мәктәп программаһында эпос тик 9-сы класта 2-3 сәғәт эсендә өйрәнелә. 2-3 дәрестә генә, әлбиттә, эпосты бар яҡтан да анализлап, фәлсәфәһенә төшөнөп өлгөрөп булмай. Беҙ, башҡорт теле һәм әҙәбиәте уҡытыусылары, бер нисә йыл инде бер үк тәҡдим менән сығыш яһайбыҙ: мәктәптәрҙә "Урал батыр" эпосын, әҙәбиәт дәрестәренең программаһына индереп, мөмкин тиклем иртәрәк өйрәнергә кәрәк. Башланғыс кластарҙан уҡ милли эпосты өйрәнә, ятлай башлаһаҡ, бигерәк яҡшы булыр ине! Шунда һөҙөмтә буласаҡ. Бала зиһененә рухи орлоҡ, иман, әҙәп нигеҙҙәре кәрәкле мәлендә һалынасаҡ. Һүҙемде Вәкил Хажиндың фекере менән йомғаҡлағым килә: "Ер шарында 6 меңләп милләт йәшәй, - тип һөйләгәйне ул бер сығышында. - Шуларҙың йөҙләбендә генә эпос жанры бар, бер нисәүһендә - икешәр. Бер башҡортта ғына 40-тан ашыу эпос бар. Ә инде оло тарихтарға бәрәбәр 1300-ҙән артыҡ йырҙарыбыҙ үҙе ни тора!"

*БАШ ҠАЛАМ*

# АУЫҘ ТУЛТЫРЫП...

## "Өфөбөҙ", тим



**Өфөбөҙ. Нәҡ шулай тип, ауыҙ тултырып, "Өфөбөҙ", тип әйтәм, сөнки баш ҡала республикабыҙҙы умыртҡа бағанаһылай үҙенә бәйләп тороусы бер үҙәк бит. Өфөнөң ҡап уртаһында йәшәүсе лә, төбәктең иң алыҫ районының төпкөл ауылында көн итеүсе лә баш ҡаланың тын алышын, үҙгәрештәрен күреп-белеп, аңлап тора. Бөгөнгө көндә, интернет заманында, мәғлүмәт йәшен тиҙлегендә тарала, шуға күрә һәр кем.бөтә эштәр, хәл-әүхәлдәр тураһында хәбәрҙар.**

Мин Өфөлә дүрт тиҫтәнән ашыу йыл йәшәйем. Һупайлы биҫтәһенә килеп төпләнгәнгә тиклем, баш ҡаланың төрлө районында, урамында йәшәргә тура килде. Ҡайҙа ғына йәшәһәм дә, шул тирәлә барған һәр яңы үҙгәреште күңелемә һеңдерә барҙым һәм әле лә ошо ғәҙәтемде ташламайым. Эшем буйынса ҡала буйлап күп йөрөргә тура килә, шуға күрә күп нәмәне күреп-белеп торам. Әйтергә кәрәк, Өфө үҫә, урамдар төҙөкләндерелә, сауҙа үҙәктәре асыла, етмәһә, булғандары ла төрлөсә итеп исемдәрен үҙгәртә, яңы йорттар ҡалҡа, автобус туҡталҡалары яңыртыла һәм башҡалар.

Әлегә тиклемге күҙәтеүҙәремдән сығып, Шаҡша яҡтары баш ҡаланың төҙөкләндереүҙе иң көткән райондарының береһе тип әйтер инем. Был районда сүп-сар күп. Әллә сығармайҙар уны, әллә урындағы халыҡ үҙҙәре сүп-сарҙы ҡайҙа етте, шунда ташлап, был проблеманы арттырыуға юл ҡуя? Шулай ҙа төп сәбәп сүп-сарҙың ваҡытында һәм тулыһынса сығарылмауына ҡайтып ҡалалыр, тип уйлайым. Оло йәштәге кешеләр күп йәшәй Шаҡшала, тип билдәләр инем. Ләкин, ысынын әйткәндә, уларға ултырырға эскәмйәләр ҙә юҡ кимәлендә.Таяҡтарына таянып, ағасҡа һөйәлеп әңгәмәләшеп торған ҡарттарҙы күреү шатландырмай. Парктар ҙа юҡ тиерлек бында, йәштәр һәм балалар өсөн спорт, уйын майҙансыҡтары тураһында әйтеп тораһы ла юҡ.

Инорс биҫтәһе оҡшай миңә. Үҙе бер айырым дәүләт һымаҡ күрәм мин ошо биҫтәне ҡайһы саҡта. Үҙәктән алыҫ булыуҙарына ҡарамайынса, әүҙем һәм тиҙ үҫешкән был районда йәшәүселәр һаны йылдан-йыл арта бара. Ял итеү өсөн дә урындар күп, мәктәптәр һәм балалар баҡсалары ла етерлек, кинотеатрҙары ла бар. Ғөмүмән, таҙалыҡ яғынан да яҡшы район был. Көндән-көн тик яҡшы яҡҡа ғына үҙгәргән биҫтә, тип әйтер инем.

"Планета" сауҙа һәм күңел асыу комплексы тирәһе тураһында айырым әйтеп үткем килә. Әллә күпме өйҙәр төҙөлдө, уларҙың барыһы ла бейек йорттар, тимәк, халыҡ та бик күп йәшәй бында. Әле булһа йорттар төҙөүҙе дауам итәләр. Ә улар төрлө яҡҡа һуҙылған юлдар уртаһында ултыра, көнө-төнө тығындар, машина ҡуйыу урындары юҡ, иҫ китерлек тә инде.

Үҙем йәшәгән Һупайлы тураһында әйтеп үтергә кәрәктер. Минең өсөн иң яҡшы район ул Һупайлы. Бигерәк тә яҙҙан алып ҡышҡа тиклем бында йәшәү - йән рәхәте. Әлбиттә, ҡыш етеп, ҡарҙар яуһа, хәлдәр бер аҙ ҡатмарлаша: юлдар, тротуарҙар ҡарҙан әллә ни яҡшы итеп таҙартыла тип әйтә алмаҫ инем. Ә былай биҫтәлә йәшәү өсөн бөтә шарттар ҙа бар: балалар баҡсалары, мәктәптәр, үҙенең күле булған ял итеү паркы (хәҙер ул күл тирәләй ҙә йорттар төҙөргә итәләр бит әле), төрлө түңәрәктәр гөрләп эшләп тора, бар нәмә ҡул һуҙымы ерҙә генә. Ә велосипедсылар өсөн шарттар булдырылһа, тағы ла яҡшыраҡ булыр ине. Өфө хаҡындағы ҡыҫҡаса күҙәтеүем ошолар. Башҡа райондар тураһында ла яҙырмын әле.

**Батыр САФИН.**

## Б А Ш  Ҡ А Л А  Х Ә Б Ә Р Ҙ Ә Р Е

✓ Башҡортостандың баш ҡалаһында "Өфө муйынсағы"ның иң матур участкаларының береһе - "Ҡариҙел һуҡмағы"н төҙөкләндереү эштәре тамамлана. Был хаҡта үҙенең телеграм-каналында баш ҡала мэры Ратмир Мәүлиев хәбәр итте. Биш саҡрым оҙонлоҡтағы яңы маршрут өфөләрҙең яратҡан урынына әүерелде. Йәйәүлеләр зонаһы Киров һәм Совет райондары территорияһын - "Аврора ынйыһы"н һәм "Аҡбуҙат һуҡмағы"н берләштерә. "Дөйөм оҙонлоғо бер километр тәшкил иткән ике баҫҡыс ҡуйылды, асфальт түшәйбеҙ, яҡтыртҡыстар урынлаштырабыҙ, күҙәтеү һәм спорт майҙансыҡтары төҙөйбөҙ. Былар барыһы ла халыҡтың яҡшы һәм сәләмәт ялын ойоштороу өсөн", - тип билдәләне Ратмир Мәүлиев.

✓ Өфөлә XI "Мисс Башҡортостан-2025" төбәк матурлыҡ конкурсының финалы уҙҙы. Конкурс "Мисс Рәсәй" милли гүзәллек конкурсының төбәк партнеры булып тора. "Мисс Өфө-2025" исемен Өфөнән Ангелина Риферт алды. Уға 18 йәш, ул төҙөлөш колледжында уҡып йөрөй. 1-се вице-мисс - Әбйәлил районынан 18 йәшлек Розалиә Низамова, Өфө дәүләт нефть техник университеты студенты. 2-се вице-мисс - Әбйәлил районынан 21 йәшлек Әлиә Йәнбирҙина, Өфө фән һәм технологиялар университеты студенты. Конкурсты Бөтөн донъя башҡорттары ҡоролтайы булышлығында LUNA моделдәр агентлығы үткәрҙе.

✓ Өфөнөң Октябрь районында хеҙмәтләндереү инфраструктураһы булған вертолеттарҙы ҡабул итеү өсөн терминал барлыҡҡа килеүе ихтимал. Республиканың "Инвестиция сәғәте"ндә "ХелиПорт-Өфө" компанияһы директоры Ольга Старцева уның проекты менән таныштырҙы. Бәләкәй авиацияның үҫешеүенә бәйле ҡалаға һауа судноларын хеҙмәтләндереү өсөн заманса майҙансыҡ кәрәк, тип билдәләне ул. Объектты сафҡа индергәндән һуң 17 яңы эш урыны булдырыла. Проектҡа өҫтөнлөклө тигән статус бирелде: инвестор ерҙе сауҙалашыуһыҙ ҡуртымға алырға мөмкин.

✓ Рәсәй Президенты указы менән Өфө ҡалаһының 153-сө лицейынан Лилиә Адееваға, Бөрө ҡалаһының 8-се мәктәбенән Людмила Егошинаға, Иҫке Балтас ауылының 2-се мәктәбенән Фәйрүзә Шәрифйәноваға "Рәсәй Федерацияһының атҡаҙанған уҡытыусыһы" исеме бирелде. Указға ярашлы, Лука Крымский миҙалы менән республика кардиология үҙәгенең баш табибы урынбаҫары Гүзәл Ғүмәрова бүләкләнде, ә Рәүилә Таминдарова "Герой-Әсә" маҡтаулы исеменә лайыҡ булды.

**"БАШИНФОРМ" материалдары файҙаланылды.**

ЗИҺЕН КИҢӘЙТЕП...



# КӨНЬЯҠ УРАЛ ҠОШТАРЫ

**Өкө, ҡолаҡлы ябалаҡ**

**(Филин)**



Өкө тигән барыбыҙға ла билдәле ҡош менән өкө һымаҡтар отрядының өкөләр төркөмөн башлайбыҙ. Уларҙың үҙенсәлекле тышҡы ҡиәфәте башҡа ҡоштарҙан айырылып тора. Башындағы ҡауырһыны түнәрәк "бит" яһап тора, күҙҙәре алға ҡараған. Муйыны төрлө яҡҡа борола, һөҙөмтәлә, өкө башын 270 градусҡа тиклем бора ала. Төнөн дә, көндөҙ ҙә яҡшы күрә. 2-8 йомортҡа һала. Бәпкәләре һуҡыр, аҡ йөнлө була. Башҡортостанда өкөләрҙең 12 төрө осрай.

Өкө ярайһы ҙур ҡош, ҡанаттарын йәйеп ебәрһә, 2 метрға етә. Ҡара оҙон ҡолаҡлы, төҫө ҡарағусҡыл-ерәндән алып алтынһыу-көрән, ҡара ҡауырһындары уны тағы ла үҙенсәлеклерәк итә. Ҡабырғаһында һәм ҡорһағында ҡара төҫтә буй-буй һыҙаттары бар. Бармаҡтары ла ҡауырһын менән ҡапланған, күҙҙәре - ҡыҙыл, ҡыҙғылт һары. Ҙур кәүҙәле булыуына ҡарамаҫтан, тын ғына оса. Тауышы көслө, "у-гуух" тип ҡысҡырғанда баҫым икенсе ижекҡә төшә. Ҡайһы саҡта ҡысҡырып, өҙләкһеҙ "көлә", аҙғы төндә быны ишетеү нисектер күңелгә шом өҫтәй.

Февралдә үк оя ҡора башлай. Бейек тауҙарҙағы ҡаяларҙа, текә ярҙарҙа, ҡараңғы урманда иһә ерҙә оя эшләй.

Өкө республиканың бөтөн төбәгендә лә осрай торған ғәҙәти ҡош ине. Бөгөн иһә Өфө яҫылығында күренгәне бар, бәлки, Бәләбәй ҡалҡыулығында, шулай уҡ Иглин районында оя ҡороп йәшәйҙер. Көньяҡ Уралда өкөнөң һаны күберәк. Йылайыр яҫылығының кеше һирәк йәшәгән төбәктәрендә, Мораҡ ауылы тирәһендәге йылғалар буйҙарында, Ағиҙелдең Ҡағы ауылынан түбәнге, ағымындағы далаларҙа һәм Шүлгәнташ ҡурсаулығында бар. Ирәндектең төньяҡ яғында, Уралтауҙың урмандарында, Ирәмәлдә, Таналыҡ йылғаһының түбәнге ағымындағы ҡаялы ярҙарҙа оя ҡора.

Кимереүселәр, ваҡ йыртҡыстар, шулай уҡ ҡоштар, ҡуяндар менән туҡлана.

Рәсәйҙең һәм Башҡортостандың Ҡыҙыл китабына ингән. Өкөнөң һаны кәмеүгә был ҡошҡа һунар итеү һәм урмандарҙы ауыһыҙ ҡырыу сәбәпсе.

**М. Баянов, Ә. Мәмәтов, "Көньяҡ Урал ҡоштары" китабынан.**

**(Дауамы бар).**

БАЙРАМ УҢАЙЫНАН

# БЕРҘӘМЛЕК - РӘСӘЙҘЕҢ ЯҠТЫ ЙОНДОҘО

**(Фәлсәфәүи эссе)**



● Беҙ, башҡорттар, Рәсәй тип аталған ҙурҙарҙан ҙур илдә, сәйәсәттә нарыҡланганса, бөйөк державала йәшәйбеҙ. XVI быуат урталарынан бирле - был беҙгә яҡын тарихтың һуңғы 468 йылына тиң. Барса башҡорт ырыуҙарының Рәсәй составына инеүе ярты быуаттан ашыу ваҡыт дауамында бара, сөнки ошоға тиклем тарихи Башҡорт иле биләмәләре элекке Алтын Урҙаның төрлө ярсыҡтары - Ҡаҙан, Әстерхан, Себер ханлыҡтары, Нуғай Урҙаһы ҡулында ҡалған була. Алтын Урҙа замандарында башҡорттар үҙенә күрә привелигиялы халыҡ булып, иркенлектә, байманлыҡта көн итә. XVI быуатта төрлө ханлыҡтар үҙ-ара даими низағта йәшәй, бер-береһе менән һуғыша, башҡа халыҡтарҙы талай. Шуғалыр ҙа инде, 1552 йылда Иван Грозный Ҡаҙан ханлығын тар-мар итеү менән, беҙҙең ата-бабаларыбыҙ Рәсәй ҡанаты аҫтына инеүҙе хуп күрә.

● Рәсәй тарихын бер нисек тә шыма ғына итеп, драма-трагедияһыҙ тасуирлап булмай. Нимә генә булмаған ул тарихта: Киев Русенең тарҡалыуы, ваҡ кенәзлектәргә Азия күскенселәренең һөжүм итеп, мал-мөлкәтен талап алыуы, халҡын әсиргә алып, ҡоллоҡҡа һатыуы, һуңынан үҙ-ара һуғыш-низағтар, монгол-татар хандары власы аҫтында ҡалыу, шведтарға, герман рыцарҙарына, поляк шляхтаһы ғәскәрҙәренә, төрөктәргә, француз илбаҫарҙарына ҡаршы көрәш, рус-япон, Беренсе донъя һуғышында ҡан ҡойош... Ишеү етмәһә, 1917 - 1920 йылдарҙағы граждандар һуғышы ҡыйралышы Рәсәйҙе ныҡ ҡаҡшата. Ә Бөйөк Ватан һуғышы башында Рәсәй торған СССР державаһының азатлығы һәм мөстәҡиллеге өсөн иң ҙур, хәл иткес халыҡ һуғышына әйләнә.

● Әлбиттә, Рәсәй составындағы Башҡорт иле заманында бик күп һынауҙар аша үтә, хатта уның катастрофик хәлгә төшкән мәлдәре лә була. Батша Рәсәйе чиновниктары йәбере, заводчик-фабрикантлар ҡыҫымы аҫтында ла йәшәгән халҡыбыҙ. Түҙемлеге бөткәс, баш күтәргән, ихтилалдарға сыҡҡан, ҡан ҡойошло яуҙарҙа ҡырылған. Батша властары өсөн эске сәйәсәттә Себер, Урта Азия йә иһә Кавказ халыҡтары менән түгел, башҡорттар менән идара итеү иң ҡатмарлы проблема булып ҡала. Тик шуға ла иғтибар итергә кәрәктер: ниндәй генә Рәсәй батшаһы булмаһын, уларҙың береһе лә башҡорттарҙың аҫабалыҡ хоҡуғына ҡаҫҡынмай, ул 1917 йылғы түңкәрелешкә тиклем үҙ көсөндә ҡала.

● Уҙған быуаттың һуңғы тиҫтәһендә, Совет ҡоролошо юҡ ителгәс, 70 йыллыҡ СССР (шул иҫәптән Рәсәй) тарихы, башлыса, ауыһыҙ тәнҡитләнә, элекке идеология яңыһы менән алыштырыла, донъя кимәлендә элекке бөйөк державанан харабалар ғына ҡала. Тик яңы идеологтар ул саҡта бер нәмәне онота: тарихта теләк-шарт һөйкәлеше булмай, уны һис бер кем кире ҡайтара ла, үҙгәртә лә алмай. Әлбиттә, кешеләр, йомғиәт тарихҡа баһа бирә ала, ә ҡайһы бер тарихсылар, сәйәсмәндәргә эйәреп, уны яңынан яҙырға ла маташа. Кеше күңеле күптән уҙған ваҡиғаларҙы нисек кенә ауырһынып, тәрән кисереп ҡабул итмәһен, тарихи ысынбарлыҡтан ҡасып, тайпылып ҡалып та булмай.

● Тарих шундай күренеш ул: әҙәм балаларына, хатта иң юғары вазифа биләгән шәхестәргә лә объектив баһа бирә. Йәнә ил, дәүләт тарихын, уны ниндәй генә гениаль шәхес етәкләмәһен, халыҡ үҙе яҙа. Күренекле рус яҙыусыһы Л.Н. Толстой үҫенең донъяла киң танылған "Һуғыш һәм солох" романында тап ошондай һығымтаға килә. Халҡыбыҙҙың һуңғы 5 быуатлыҡ тарихын дөйөм Рәсәй тарихынан айырып ҡарап булмай. Ул замандың трагедиялары, катастрофалары башҡорттарҙы ситләп үтмәгән, әммә беҙ, тарихтан һабаҡ алып, бөгөнгөбөҙҙө генә ҡайғыртып йәшәй алмайбыҙ: тарихи ваҡиғаларҙы, бәғзе бер шәхестәрҙе фашлап, хатта ки үс көсәп йәшәп булмай. Тарих төпкөлдәренән киләсәккә рухи күпер һала белеү ҡиммәтлерәктер.

● Бына миҫалға Рәсәйҙең совет осорон ғына алып ҡарайыҡ. Уның халҡыбыҙға килтергән файҙаһын бер ниндәй бизмәндәргә һалып үлсәп булмаҫ ине. Үҙегеҙ уйлап ҡарағыҙ: республикабыҙ, Башҡортостан тигән дәүләтебеҙ хасил була, йылдан-йыл сәнәғәт үҫешкәндән үҫешә бара, башҡорт яҙма әҙәби теле, башҡорт матбуғаты, нәшриәте, мәғарифы, һаулыҡ һаҡлау учреждениелары, театрҙар, филармония, китапханалар, клубтар, радио һәм телевидение һәм башҡа йәшәйеш объекттары булдырыла. Һанай башлаһаң, барыһын да яҙып бөтөрөп тә булмаҫ ине. Бер генә миҫалға иғтибар бирмәйенсә булмай: XX быуатта, 30-сы йылдарҙағы үкенесле юғалтыуҙарға ҡарамай, йәш башҡорт интеллигенцияһы үҫеп сыҡты, нығынды: уларҙан башҡа бөгөнгө зыялыларыбыҙ ҙа булмаҫ ине бит.

● Бөгөнгө Рәсәйебеҙҙең дә проблемалары бихисап. Бәғзе бер сәйәсмәндәр, алдын-артын уйлап тормайынса, милли республикаларҙы бөтөрөргә кәрәк, тип яр һала. Әммә ундайҙарға ҡолаҡ һалып бармайҙар, иҫәпкә лә алмайҙар: Рәсәй Федерацияһының да, милли республикаларҙың да Конституциялары бындай ҡотҡоно тыйыу өсөн ныҡлы ерлек бирә. Тик тел сәйәсәте өлкәһендә генә хилафлыҡтарға юл ҡуйырға ярамай, сөнки низағ-конфликттар, аңлашмаусанлыҡтар ошонан башланыуы ихтимал.

● Күп өлкәле оло Рәсәй менән Башҡортостан, башҡа милли республикалар бөгөн бер бөтөнлөктө тәшкил итә. Ер шарының биштән бер өлөшөн тиерлек биләгән рус, башҡорт, яҡут, татар, сыуаш, мари, удмурт, алтай, бурят, Кавказ ҡәүемдәре, тиҫтәләгән башҡа бер халыҡтар оло бер ғаиләгә тиңдер. Халыҡ-ара татыулыҡ, дуҫлыҡ, хеҙмәттәшлек ептәре өҙөлмәһә, һәр халыҡтың тарихы, мәҙәниәте, йолалары, телдәре дәүләт яҡлауын тапһа, ыҙғыш-талаштарға юл ҡуйылмаһа, Рәсәй дәүләтенең дә нигеҙе ныҡ булыр.

**ШУЛАЙ ИТЕП...**

**Шагир-фронтовик Хәниф Кәрим заманында былай тип яҙғайны:**

**"Төн ҡаплағас киң океан өҫтөн,**
**пароходтар юлдан аҙашһа,**
**оҫта капитандар барыр юлды**
**яҡты йондоҙҙарға ҡарап табалар".**

**Дәүләтебеҙ етәкселәре лә, тарих океанының оҫта капитандарылай, сәйәсәт күгенең яҡты йондоҙҙарына ҡарап, "Рәсәй" тигән оло караптың барыр юлдарын күҙаллар, тип ышанайыҡ. Халыҡтар берҙәмлеге лә үҙе бер сағыу йондоҙҙай тойола. Рәсәй көсө - берҙәмлектә. Ә унан башҡа үҫешкә, киләсәккә алып барған юлыбыҙҙы дөрөҫ тоҫмаллай алыу мөмкин булмаҫ.**

**Вәлиәхмәт БӘҘРЕТДИНОВ.**

МАТУР БАШҠОРТ ҺҮҘЕ

# КҮҢЕЛ



**Башҡорт телендә бик күп матур һүҙҙәр бар, әммә минең өсөн иң матур башҡорт һүҙе - "күңел".**

Был һүҙҙә ҙур мәғәнә, тәрән хис-тойғо, изгелек ята. "Күңел" - ул кешенең иң изге, иң яҡты уйҙары, хыялдары, мөхәббәте, шәфҡәте тупланған урын. Башҡорт халыҡ йырҙарында, әкиәттәрендә, мәҡәл-әйтемдәрендә лә күңел һүҙе йыш осрай.

Изге күңелле кеше, тип, батырҙарҙы, мәрхәмәтле, ярҙамсыл кешеләрҙе әйтәләр. Был һүҙҙе әйткәндә һиндә йылы, яҡты хистәр уяна. Күңел - ул кешенең ағзаһы түгел, ул башҡорттар өсөн кешенең рухи донъяһы, намыҫы, тоғролого, сафлығы символы ла.

Башҡорт телендә күңел һүҙе аша күпме матур теләктәр, изге фекерҙәр еткерелә. "Күңелдән сыҡҡан һүҙ йөрәккә барып етә", - ти халыҡ. Шуға ла минең өсөн "күңел" һүҙе - иң матур, иң ҡәҙерле башҡорт һүҙе. Ә башҡа гәзит уҡыусыларға ниндәй һүҙ нығыраҡ оҡшай икән?

**Ләйсән СӘЛИХОВА.**

✓ ***Ерҙәрҙе баҫып алыуға ҡарамаҫтан, хөкүмәт башҡорттарҙың ергә аҫаба хоҡуғын таныуҙан баш тартмай. 1791 йылда батша манифесы буйынса бөтә башҡорттарҙы үҙ ерҙәренең хужалары итеп таныу тураһында ҡарар ҡабул ителә.***

*ТАРИХИ ХӘҠИҠӘТ*

# ЫРЫМБУР ГУБЕРНАТОРҘАРЫ ҺӘМ БАШҠОРТТАР

## (Генерал-майор И.В. Чернов яҙмаларынан)



**Генерал-адъютант Н.А. Крыжановский**

**(1864 - 1881 йылдарҙа губернатор булған)**

Безактан һуң яңы генерал-губернатор вазифаһына унын туғанының улы, генерал-адъютант Николай Андреевич Крыжановский тәғәйенләнә, ул һуңғы ваҡытта Варшавала генерал-губернатор була, был урын бөтөрөлгәс, биләгән вазифаһынан китә.

1865 йылдың яҙында Крыжановский барса күренекле урындарға үҙе һайлап алған кешеләрҙең тулы составы менән Ырымбурға килә. Ырымбур граждандар губернаторы һәм наказный атаман итеп полковник Бобарыкин ҡуйыла, ул элек Крыжановскийҙың адъютанты булып хеҙмәт итә. Ырымбур ҡырғыҙҙары өлкәһе менән идара итеү унын хеҙмәттәше, полковник Баллюзеккә йөкмәтелә. Уральскийға наказный атаман итеп полковник Веревкин ебәрелә, уны үҙ ваҡытында бында Безак саҡырып килтереп, махсус бурыстар үтәүсе чиновник вазифаһына ҡуйған була.

Крыжановский килгәндән һуң бында барса губерна учреждениелары менән яңы Ырымбур губернаһы булдырыла. Иң беренсе губерна идаралығы, һуңынан ҡаҙна һәм суд палаталары эшләй башлай.

Яңы Ырымбур губернаһын асыу менән бер ваҡытта генерал Крыжановский дәүләт әһәмиәтендәге тағы ла бер эш менән шөғөлләнә - Урта Азияға үтеп инеү, үҙаллы Хива, Бохара һәм Коканд ханлыҡтарын буйһондороу, унда рус хакимлығына дошман булған ҡырғыҙ батырҙары ҡасып китә торған була һәм бер ҡайғыһыҙ көн итә. Улар унда ҡоралы шайкалар туплай, хандар өсөн яһаҡ йыйыу һылтауы менән беҙҙең ҡырғыҙҙарҙы талай.

Крыжановский үҙенә тиклем идара иткәндәрҙең хәрби эшен дауам итә. Гәрсә был ҡалаға һөжүм итеү тыйылған булһа ла, урындағы ғәскәрҙәр Черняев етәкселегендә Ташкентты ала, ул, бында рустар булыуына ҡарамаҫтан, рәсми рәүештә Рәсәйҙеке тип иҫәпләнмәй, әммә һуңынан был мәсьәлә ыңғай хәл ителә.

Бохара әмире, үҙенең биләмәләре өсөн хәүефләнеп, рустар менән һуғыш башлай. Крыжановский Ташкентҡа килә, Бохара ғәскәре унан бер нисә тапҡыр еңелә, уларҙың бер нисә ҡәлғәһе баҫып алына. Крыжановский ханлыҡтың баш ҡалаһы урынлашҡан Чирчик йылғаһына тиклем барып етә, хәрби трофейҙар алып ҡайта, 3-сө дәрәжә изге Георгий ордены менән бүләкләнә - был боевой хеҙмәттәр өсөн бирелә торған иң ҙур награда.

Крыжановский төрлө проекттарҙы ғәмәлгә ашырырға тырыша, шуларҙың береһе - ҡаҙна участкаларын шәхси кешеләргә льготалы хоҡуҡ менән осһоҙораҡ хаҡҡа һатыуҙы ойоштороу. Улар киләсәктә земство учреждениелары өсөн кәрәкле кешеләр буласаҡ, тип уйлап, ул ер биләүсе дворяндарҙы күбәйтергә уйлай. Был проектты иң юғарыла ла хуплайҙар, әммә ул Крыжановский өсөн хурлыҡлы рәүештә тамамлана: ер участкаларын бүлгәндә өҫтөнлөк ғаиләле һәм ярлыраҡ чиновниктарға бирелә, был башҡаларҙа көнләшеү һәм асыу тойғоларын уята; гәзиттәрҙә ошолай итеп яһалма юл менән помещиктарҙы арттырыу ҡырҡа тәнҡитләнә, сөнки улар иҫәбенә генерал-губернаторға яҡын булған кешеләр инә. Унын ҡушыуына ярашлы, ер участкалары улдарына, кейәүҙәренә һәм башҡа туғандарына ла бирелә. Крыжановский үҙен дә онотмай. Крыжановский, Кауфман (Төркөстанский) һәм Непокойчицкий махсус хеҙмәттәре өсөн һәр береһе 6-ар мең дисәтинә ер менән тәьмин ителә. Крыжановский караптар йөрөй алған Кама йылғаһы буйындағы иң яҡшы ҡарағай урманын үҙенә ала, унын хаҡы 300 меңдән 500 мең һумға тиклем етә. Ул унда ҡаҙна аҡсаһына дача төҙөй һәм унда ике йәй йәшәй, чиновниктар Ырымбурҙан уға доклад менән килеп йөрөй.

Шул уҡ ваҡытта элекке хәрби припущенниктар бында күсеп килгәндән бирле биләгән ерҙәренән мәхрүм ҡала, сөнки уларҙың биләмәләрен чиновниктар ала; улар бик ныҡ үсегә һәм уҫаллаша, һуңғыларынан төрлө юлдар менән үс ала, утарҙарын, сәселгән һәм үҫтерелгән игендәрен яндыра, үҙҙәренә тейешле ерҙәренән яҙҙырылған өсөн бар урындарға ялыуҙар менән мөрәжәғәт итә. Припущенниктар Башҡортостанға күсеп килеп ултырған була, ерҙәре өсөн башҡорттарға аҡса түләп тора, улары ла, яйы сыҡҡан саҡта, күсеп килеүселәрҙән ҡуртым хаҡын күберәк алырға тырыша. Участкалар таратҡанда припущенниктар бөтөнләйгә ерһеҙ ҡала.

Крыжановскийҙың участкалар таратыуынан бер фәтүә лә булмай, бәлки, был уңышһыҙлыҡ запас башҡорт ерҙәрен күпләп һатыу менән дә бәйле булғандыр.

Башҡорттарҙың үҙ ерҙәрен күпләп, тәртипһеҙ рәүештә һатыуҙары айҡанлы Петербургҡа һуңғы барғанында Крыжановскийҙы юғары даирә кешеләре һис бер һанға һуҡмай. Ул тәхет мираҫсыһы Александр Александровичҡа ике йә иһә өс тапҡыр бара, әммә бер мәжлескә лә саҡырылмай; ул батша булғас, барса генерал-губернаторҙар Петербургҡа саҡырыла, әммә Крыжановский саҡырыу алмай. Крыжановский ул саҡта Ҡаҙан губернаһында ревизия алып барған сенатор Ковалевскийҙан үҙенең идаралығындағы губерналарҙа ла ревизия уҙғарыуҙы һорарға мәжбүр була. Ошо ревизия һөҙөмтәһендә 1881 йылдың 12 июлендә Ырымбур генерал-губернаторлығы бөтөрөлә.

**Арыҫлан ТАЙМАСОВ тәржемәһе.**
**(Аҙағы).**

*ТАРИХЫҢДЫ ТАНЫТ...*

# АҪАБАЛЫҠ ҺӘР САҠ ҺАҠЛАНҒАН

## Өфө ҡәлғәһе тарихы буйынса тағы бер сығанаҡ



"1661 йылда хөкүмәт башҡорттарҙың үҙҙәре биләгән бөтә ерҙәргә аҫаба хоҡуғын рәсми раҫлай", тип һыҙыҡ өҫтөнә ала автор. Бындай хәл 1730 йылға, батша указдары сығып, ҡәлғә һәм башҡа нығытмалар төҙөй башлағанға тиклем, һаҡлана. Был терәк пункттары өсөн баҫып алыу, шулай уҡ һатыу кеүек төрлө ысулдар менән башҡорт ерҙәрен ҡабат тартып ала башлайҙар. Шуға ҡарамаҫтан, властар башҡорттарҙың ергә хоҡуҡтарын таныуҙан туҡтамай.

Документты төҙөүсе фекеренсә, башҡорт ихтилалдары арҡаһында батша хөкүмәте уларҙың ер биләмәләрен сикләргә маташа - ихтилалда ҡатнашыусыларҙың ерҙәрен тартып алыу ошондай сара булырға тейеш була. Мертваго, ергә улыс хужа булыуы был санкцияны бойомға ашырыуға ҡамасаулай, тип иҫәпләй. Унын фекеренсә, ер мөнәсәбәтендәге принципиаль үҙгәрештәр XVIII быуаттың 40-сы йылдарынан башлана. Ошо осорҙа рус дворяндары өсөн башҡорт ерҙәрен иркен һатыу-һатып алыу законлаштырыла, Ырымбур ҡәлғәһенә нигеҙ һалып, унда хәрбиҙәр килтереп тултырыла, заводтар төҙөлә башлана. Был йүнәлештә "1741 йылда Яйыҡ йылғаһы буйлап башҡорт һәм ҡырғыҙ халыҡтары араһында" нығытылған Ырымбур линияһы һуҙыу иң мөһим сара булып тора. Ҡәлғәләр селтәре барлыҡҡа килеү дәүләттең төбәктә ерҙе һатыу-һатып алыу процесын законлаштырыуын тиҙләтә.

Крайҙа ерҙәрҙе баҫып алыуға ҡарамаҫтан, хөкүмәт башҡорттарҙың ергә аҫаба хоҡуғын таныуҙан баш тартмай, тип раҫлай документты төҙөүсе. 1791 йылда батша манифесы буйынса бөтә башҡорттарҙы үҙ ерҙәренең хужалары итеп таныу тураһында ҡарар ҡабул ителә. Бының менән властар ихтилалда ҡатнашҡан башҡорттар һәм уларҙың тоҡомдары өсөн ер биләүгә сикләүҙәрҙе бөтөрөү тураһында рәсми рәүештә иғлан итә.

**Ирек АҠМАНОВ,**
**тарих фәндәре докторы, профессор.**
**(Дауамы. Башы 22-се һанда).**

*БАШҠОРТ ҠАМУСЫ*



# БАШҠОРТТАР

## Һунарсылыҡ, ҡошсолоҡ һәм балыҡсылыҡ

Һауыт йәнлектәр йөрөгән урындарға дуға тап һуҡмаҡҡа тура килерлек итеп һалына. Тоҙаҡ та, дуға ла ҡар менән күмелә. Бының өсөн махсус тар һәм оҙон көрәк ҡулланыла.

Тоҙаҡтың тағы бер төрө атма тип атала. Тибы буйынса ул һаплы йәйәнең бер төрө булып, буҫағанан һәм йәйәнән тора. Буҫаға эсенә тел ҡуйыла, ул уҡтың маҡсатын үҙенә ала. Атма нигеҙҙә аҫтарҙы тотоу өсөн һуҡмаҡтарҙа, ағас ҡыуышында урынлаштырыла. Миңә мәғлүм булыуынса, XIX быуаттың икенсе яртыһынан башҡорттар йәйәләрҙе бер ниндәй йәнлеккә лә ҡуймаған. Шуға ҡарамаҫтан, башҡорттарҙың айыуға ҡорған был ҡоралын И.И. Лепехиндың һүрәтләүе ҙур ҡыҙыҡһыныу тыуҙыра: "Улар айыуҙың бер ниндәй ҡурҡытыуҙарға ҡарамай солоҡҡа килеүен шәйләһәләр, ҡаҙыҡ тип аталған ябай тоҙаҡ эшләй **(һүрәт)**. Солоҡ урынлашҡан ағасты ҡаҙыҡтар менән уратып алалар (a) һәм ситән үрәләр. Айыу солоҡҡа килә торған





урында ике аршин самаһы асыҡ ишек ҡалдыралар. Унын бер яғынан оҙон буйлы кешенең тубығы тирәһенән булған ҡаҙыҡ ҡағып (b), унын тураһынан бер сажин тирәһе ситтә икенсе ҡаҙыҡты ҡағалар (c) һәм уларҙың икеһен дә арҡыры һалынған ҡаҙыҡ - сит ҡаҙыҡ (d) менән нығыталар. Сит ҡаҙыҡтан ситтәрәк, ике сажин тирәһе алыҫлыҡта тағы ике ҡаҙыҡ ҡағып (e, f) улар араһына сей ҡараманан һайғау (g), ян беркетелә һәм унын осона (k) штау (тышау) (i) һалына. Тышауға кенде (кендек?) бәйләнә. Ул ян тартылыу менән сит ҡаҙыҡҡа яһалған киртектә урын ала. Яндың икенсе яғында сит ҡаҙыҡ менән бер линияла унын оҙонлоғонда йыуан уҡ йәки һөңгө (m) урынлаштырыла. Кендектең осона нәҙек кенә еп бәйләнә һәм шулай уҡ ҡаҙыҡҡа нығытыла, әммә ул тартылып тормай, ә бушағыраҡ була. Ишек (pp) еп (q) күренмәҫлек итеп ҡоро-һары сытыр менән ҡаплана. Айыу үҙенең ғәҙәте буйынса ишек аша солоҡҡа яҡынлашыу өсөн сытырҙы этәгәндә епкә тейә. Һөҙөмтәлә кендек (n) ысҡына. Ян бар көсөнә уҡты ата һәм ул айыуҙың ҡабырғаһын йәки күкрәген тишеп үтә. Айыу йә шунда уҡ, йә бер аҙ барғас йән бирә.

Бынан тыш, башҡорттарҙың айыуға тағы бер нисә һунар ысулы була. Уларҙың ҡайһы берҙәре йыртҡысты тотоуҙан бигерәк, умарталарҙы һаҡлау маҡсатында ҡуйыла. Башҡорттарҙа солоҡто айыуҙан һаҡлау өсөн ағас ҡыуышы эргәһенә оҙон бауға йыуан ағас түмәр, тумран йәки таш аҫып ҡуйыу ҙа билдәле. Солоҡло ағас тирәләй ергә осло имән ҡаҙыҡтар ҙа ҡағып сыҡҡандар. Айыу ағасҡа менгәндә был осло ҡаҙыҡтарҙы урап үтә, ә инде төшкән ваҡытта тап шул ҡаҙыҡтарға ҡолай һәм, ғәҙәттә, шунда уҡ йән бирә.

**(Дауамы бар).**

# МИЛЛИ асылыбыҙҙың

***✓ Тел бөтһә, халыҡ бөтә, тиҙәр. Мин был фекергә өҫтәп: "Ат бөтһә лә, халыҡ бөтә", - тип әйтер инем. Башҡорт атһыҙ башҡорт булмаҫ ине, бәлки шул телдә һөйләшкән икенсе бер сифаттағы халыҡ булыр ине.***



**Милли байрамдар, тигәндә, беҙ иң тәүҙә һабантуйҙы, һабантуй тигәндә, иң тәүҙә милли көрәште, ат бәйгеһен, ҡолғаға үрмәләүҙе, күҙ бәйләп көршәк ватыуҙы, тоҡ менән һуғышыуҙы, тоҡ кейеп йүгереүҙе күҙ алдына килтерәбеҙ. Билдәле ғалим-этнолог, юрист, философия фәндәре кандидаты Зәкирйән ӘМИНЕВ халҡыбыҙҙың үлемһеҙ ҡомартҡыһы "Урал батыр" эпосына бағышланған киң билдәле "Урал батыр" эпосында боронғо башҡорттарҙың космогоник ҡарашы" тигән хеҙмәтендә башҡорт мифологияһын өйрәнеүҙең өр-яңы методологияһын барлыҡҡа килтереп, фәнебеҙҙә сенсация яһауға өлгәште. Ғилми даирәләр был фактҡа күҙ йомоп ҡараһа ла, донъяның төрки ғилем эйәләре һуңғы ваҡытта ғалимды үҙҙәрендә үткән фәнни конференцияларға, форумдарға саҡыра башланы. Милли байрамыбыҙ һабантуйға арналған икенсе бер хеҙмәтендә Зәкирйән ағай халҡыбыҙҙың күп кенә байрам сараларының, атап әйткәндә, һабантуйҙың нигеҙендә "Урал батыр" эпосы ятыуы хаҡында кире ҡаҡҡыһыҙ дәлилдәр килтерҙе.**



**Ә Башҡортостандың атҡаҙанған мәҙәниәт хеҙмәткәре Юлай Ғәлиуллинды беҙ республикала киң таралыу алған "Мәргән уҡсы" хәрәкәтенең етәксеһе, Башҡортостанда, Рәсәйҙә, донъяла уҙған күп һанлы милли уйындарға, уҡ атыуға, джигитовкаға бәйле ярыштарҙа, фестивалдәрҙә еңеү яулаған халҡыбыҙ батыры итеп беләбеҙ. Һуңғы йылдарҙа Баймаҡ районында үткәрелә башлаған "Башҡорт аты" байрамының һәр ваҡыт уртаһында ҡайнай Юлай ҒӘЛИУЛЛИН.**
**Ошо ике арҙаҡлы шәхесебеҙ менән ҡорған әңгәмәлә беҙ милли байрамдар, уйындар, уларға бәйле халҡыбыҙ тарихы хаҡында һүҙ алып барабыҙ.**

**Зәкирйән ағай, ғилми хеҙмәттәрегеҙгә яҙғандан тыш, милли байрамдарыбыҙҙың тағы ла ниндәй үҙенсәлеге хаҡында әйтер инең?**

**Зәкирйән Әминев:** Беҙҙең байрамдарҙың күбеһе ыңғай ваҡытҡа, йәки йылы миҙгелгә яраҡлашҡан. Ҡыш байрамдар артыҡ юҡ та беҙҙә. Беҙҙә генә түгел, күп халыҡтарҙа ҡыш тиҫкәре ваҡыт һанала. Был ваҡытта бар тәбиғәт йоҡлай, үле хәлендә була. Ҡыш төньяҡ, төньяҡ үлем менән бәйле. Борон ваҡыт ике миҙгелгә: яҙға һәм көҙгә бүленгән. Яҙ, тигәндә - йәйҙе, көҙ, тигәндә, ҡышты аңлағандар. Шуға күрә лә яҙлы-көҙлө төшөнсәһе барлыҡҡа килгән дә инде.

Элек йәмле яҙҙар етеп, тәбиғәт уянып, тау биттәре асыла башлау менән йәштәр уйынға сыҡҡан. Артабан "Ҡарға бутҡаһы", "Ҡарғатуй", "Кәкүк сәйе" байрамдары. Совет осоронда һабантуйҙар май аҙағында, июнь башында, йәғни сәсеүҙәр тамамланғас үткәрелә ине. Унан алдараҡ һабантуйҙар көн менән төн тигеҙләшкән саҡта, 22 июндә үткән. Атайым һөйләүенсә, тап ошо көндә һабантуй барғанда район яғынан һыбайлы сабып килеп, һуғыш башланыуын хәбәр иткән. Кешеләр борсола башлаған, һабантуй ҡайғыһы киткән. Һуңынан, мифология менән шөғөлләнә башлағас, 22 июндең һабантуй үткәрер өсөн иң уңайлы көн булыуын да аңланым.

**Бала сағыбыҙҙан шул иҫтә ҡалған: яҙ етеү менән беҙ талдан ҡылыс эшләп алып, ҡулдарыбыҙҙы күгәртә-күгәртә, туҡтауһыҙ ҡылыс алыша торғайныҡ. Беҙгә ҡыҙҙар ҙа ҡушылыр ине. Күрәһең, беҙгә уйын рәүешендә килеп еткән был сара борон-борондан ирегеттәрҙе, ҡыҙ-ҡырҡынды һуғышҡа әҙерләүсе күнекмәләр булғандыр. Һуңғы йылдарҙа төрөктәр төшөргән тарихи сериалдарҙың барыһында ла тиерлек шулай уҡ ағас ҡылыс менән күнекмәләр яһайҙар. Ә һеҙҙең ауылдарҙа булдымы ундай саралар?**

**Зәкирйән Әминев:** Ҡылыс алышыуҙар бер мәрәкәһе менән ныҡ иҫтә ҡалған. Минең ҡулдар ныҡ оҙон булғас, өлкәндәр барыбыҙҙы теҙеп ҡуйып, ҡулдарҙы тигеҙ итеп алға һондороп, минең ҡылысты ҡыҫҡартып ҡырҡырға маташа торғайнылар. Мин һәр ваҡыт быға риза булмайынса ҡаршылаштым. Йәнәһе, шулай итһәң, ғәҙел була. Ә бит кемдеңдер ҡулы минекенән ҡыҫҡараҡ булыуында бер ғәйебем дә юҡ ине ләбаһа.

**Юлай Ғәлиуллин:** Ҡайһы ауылда малайҙар ҡылыс алышҡан, уҡ атышҡан - шул башҡорт ауылы булған инде ул.

**Юлай, бына ошо ҡылыс алышыуҙы, уҡ атышыуҙы һәм башҡа бик күп милли уйындарҙы күҙ уңында тотҡанда беҙҙең бындай саралар, асылда, хәрби характерлы булған тип әйтә алабыҙмы?**

**Юлай Ғәлиуллин:** Һис һүҙһеҙ, шулай. Элек-электән халҡыбыҙ йылҡысылыҡ менән шөғөлләнгән. Йылҡысылыҡ беҙҙең өсөн туҡланыр ризыҡ та, яу ҡоралы ла, транспорт та - барыһын да тәшкил иткән. Ырыуҙағы һәр бер ир-ат - оло йәштәме, йәшме, малаймы, оҙон буйлымы, бәләкәйме, йыуанмы, нәҙекме, яугир һаналған. Сөнки беҙҙән йәшәү рәүешебеҙ яугир булыуыбыҙҙы талап иткән. Шуға күрә лә барлыҡ милли уйындарыбыҙҙың яугир әҙерләүгә ҡоролоуына һис тә аптырарға түгел. Ир-ат яуҙа саҡта йорт-ерҙе, малды һаҡлау ихтыяжы ҡатын-ҡыҙҙарҙы ла яугир булырға мәжбүр иткән. Ҡаҙаҡтарҙы алһаҡ, улар күпселектә һарыҡ, дөйә аҫырағандар. Уларҙа тотош халыҡтың яугир булыу ихтыяжы ла беҙҙәге һымаҡ уҡ булмаған. Ҡаҙаҡтарҙың хандары ғына ғәскәр тотҡан. Ғәскәр үҙ халҡын да талаған, ситкә лә барымтаға йөрөгән. Беҙҙә иһә тәбиғәт һәм йәшәү рәүеше тотош халыҡтың ғәскәри булыуын талап иткән, йәғни һәр ырыуҙың үҙ ғәскәре булған.

**Һуңғы ваҡытта беҙҙә ҡасандыр йыш уйналып, аҙаҡ онотола төшкән "Ылаҡ" уйыны киң таралыу алды. Был уйындың етеҙлеккә күнекмә үткәреүҙән тыш, мәғәнәһе, маҡсаты нимәгә ҡайтып ҡала тип иҫәпләйһең?**

**Юлай Ғәлиуллин:** Яуҙа йөрөгәндә берәү яраланып, эйәрҙән ҡолап ҡалһа, уны яу яланын алып сығыу өсөн күнекмә ул был уйындың маҡсаты. Яуҙан ҡайтыуыңа әсәйең: "Ағайың ҡайҙа, ҡустың ҡайҙа, еҙнәң ҡайҙа?" - тип һораған саҡта бер ваҡытта ла яуапһыҙ ҡалмаған башҡорт яугиры. "Ул һуғыш яланында яраланып ятып ҡалды, мин ҡасып ҡайттым",- тип әйтә алмаған бит инде. Эйәрҙән ҡолаған яугирҙы, ул яралымы, һәләк булғанмы, яу яланында ташлап китмәгәндәр. Яугирҙар араһында эйәрҙән ҡолағандарҙы йыйып йөрөүселәр ҙә булған. Ерҙәге яугирҙы эйелеп алған саҡта дошман һуғышсыһы һөжүм итмәһен өсөн һаҡсылар ҙа эйәргән, йәғни был ғәмәл яңғыҙ башҡарылмаған. "Ылаҡ" уйынын тамаша ҡылыусы күптәр, бигерәк тә башҡа милләт вәкилдәре, уйынды ҡырағайлыҡҡа тиңләй. Киреһенсә, был уйын яугирҙарҙы бер йоҙроҡҡа туплауы, берҙәмлеккә өйрәтеүе менән әһәмиәтле.

**Ә бына яраланған яугирҙы, ятып, эйәренә һалырға ярҙамлашырға аттарҙы нисек өйрәткәндәр икән?**

**Юлай Ғәлиуллин:** Ҡолон сағынан күнектергәндәр. Элек-электән башҡорттоң бер генә аты булмаған. Ер һөрөү өсөн бер ат, йәрминкәгә егеп барыр өсөн икенсе ат, ҡунаҡҡа барырға өсөнсө ат, яуға барырға дүртенсе ат. Яу аты икәү булған. Бының өсөн йөҙ аттан ике атты һайлап алғандар.

**Зәкирйән Әминев:** XIX быуаттағы урыҫ ғалимдары "Башҡорттарҙың аттары үҙҙәре кеүек, тауға менгәндә улар атының ялына һәм ҡойроғона йәбешә..." тип яҙып ҡалдырған. Тарихыбыҙ шуға ла шаһит: башҡорт Волга, Дунай, Днепр йылғалары аша сыҡҡанда ла атының ялына йәбешкән.

**Нисек уйлайһығыҙ, ат менән йылҡы нимәһе менән айырыла?**

**Юлай Ғәлиуллин:** Йылҡы - ул ит, ҡымыҙ өсөн үрсетелгән, өйөрҙә йөрөгән мал, ә ат егергә, эйәргә, эшкә өйрәтелгәне. Йылҡының ҡушаматы ла булмаған. Башҡорттар үҙе менеп йөрөгән атын ашамаған, бының өсөн йылҡыны файҙаланған. Яу юлдашы булған, егеп йөрөгән ат һәләк булһа, салып күмгәндәр.

**Зәкирйән Әминев:** Төрки донъяһында йөрөгәндә шуға иғтибар иттем: бөтә төрки халыҡтар ҙа йылҡы итен ашамай. Улар йылҡыны изгеләштергән. Ә беҙҙең өсөн йылҡы тәбиғәттең бер өлөшө. Шуға башҡорт уны төрлө маҡсатта файҙаланған. Бына төркмәндәргә барҙым, улар йылҡы ите ашамай, сөнки уларҙа ҡырағай йылҡы, тарпандар булмаған. Шуға күрә беҙҙең халыҡтың йылҡы итен ашауын тарпандар аулауға бәйләп тә аңлатырға булалыр. Төркмәндәр иһә атты йылҡынан эйәләштерелгән формала ҡабул иткән.

**Һуңғы йылдарҙа колхоз-совхоздар юҡҡа сыҡҡандан алып һабантуйҙар һирәкләп үткәрелеп, "Башҡорт аты" байрамы барлыҡҡа килде. Хатта яңы байрамдың һабантуйҙың урынын аласаҡ тигән фекерҙәр ҙә барлыҡҡа килде. Был дөрөҫмө?**

**Юлай Ғәлиуллин:** Юҡтыр, сөнки күп райондарҙа, татарҙар, удмурттар, мордвалар йәшәгән райондарҙа ла һабантуйҙар үткәрелә. Улар "Башҡорт аты" байрамына килеп, тамаша ҡылып йөрөйҙәр, әммә унда ҡатнашыр өсөн тарих кәрәк. Әгәр ҙә халыҡтың тарихында үҙенең аты булмаһа, нисек ҡатнаша алһындар!

**Зәкирйән Әминев:** Һүҙеңә ҡеүәт, улым Өфөлә тыуҙы. Бер йәшендә күтәреп китеп барам. Әле ул ауылда булғаны юҡ ине, ҡаланың ятағын ғына белә. Карл Маркс менән хәҙерге Зәки Вәлиди урамдары киҫелешкән ерҙә һөт ташыусы егелгән аты менән үтеп бара. Ғүмерҙә лә ат күрмәгән, әле һөйләшә лә белмәгән улым ҡулымда талпынып: "На-а-а..."- тип ҡысҡырып ебәрҙе. Ат яғына ынтылып иларға тотондо бер саҡ. Юл аша сығып, ат янына барып туҡтағайныҡ, улымдың ҡыуанғанын күрһәгеҙ, күҙҙәре яна башланы. Күрәһең, беҙҙең ҡанда барҙыр атҡа бәйлелек. Һуңынан Бөрө ҡалаһына йәшәргә күскәс, һүрәт төшөрә башлаған улым гел ат һүрәте яһарға керешә. Бер аҙҙан эттәрҙе лә һынландырырға тотондо.

Бер мәл Мәскәүгә барғанда ул саҡта дефицит һаналған карточка формаһында яҙыр өсөн ҡағыҙҙар алып ҡайтҡайным. Эштән өйгә ҡайтып инһәм, ул ҡағыҙҙар иҙәндә туҙрап ята. Уларға ҡыйыш-мыйыш һыҙыҡтар сыймаҡланған. Һыҙыҡтары өтөрҙө хәтерләтә. Тәүҙә әрләргә уйланым да, тыйылып:

- Улым, бында ниңә өтөрҙәр яһап бөттөң? - тип һорай ҡуйҙым.

- Атай, был өтөр түгел, ә этебеҙ Пальманың тояғы, - тип яуапланы Юлай.

Баҡтиһәң, икенсе бер ҡағыҙға этебеҙҙе эшләй башлап, уның өс тәпәйен төшөргән дә, дүртенсеһен килештерә алмағас, ошо ҡағыҙҙарҙы ҡаралама өсөн файҙаланған икән. Ә ул эттең бер аяғы зиғиферәк ине. Бер мәл эштә ултырһам, этебеҙҙең һүрәтен эшләп бөткән улым кабинетҡа килеп инде. Маҡтаным инде үҙен.

Минең кабинетта енәйәтселәрҙең фотороботтарын эшләр өсөн төрлө күҙ өлгөләре ята ине. Бер мәл улым шул күҙҙәр менән ҡыҙыҡһынып китте. Мин ул һүрәттәр ярҙамында кешенең эске донъяһын аңларға өйрәттем. Артабан улым күҙҙәргә ҡарап, яйлап-яйлап кешенең эске донъяһын өйрәнә торғас, рәссам булып китте...

**Зәкирйән ағайҙың улы Юлайҙың кисерештәрен аңларға була. Бына мин дә былтыр "Башҡорт аты" байрамында юғары рухи күтәренкелек тойғоһо кисерҙем. Беренсенән, меңдәрсә кешенең бер юлы һыбай ат өҫтөндә үтеүе, икенсенән ат тояғы тауышы, өсөнсөнән, төрлө сараларҙа ҡатнашҡан егеттәрҙең оһоллоғо, етеҙлеге һәм ҡыйыулығы. Был сара бына һеҙгә ниндәй йоғонто яһай?**

**Юлай Ғәлиуллин:** Тел бөтһә, халыҡ бөтә, тиҙәр. Мин был фекергә өҫтәп: "Ат бөтһә лә, халыҡ бөтә", - тип әйтер инем. Башҡорт атһыҙ башҡорт булмаҫ ине, бәлки шул телдә һөйләшкән икенсе бер сифаттағы халыҡ булыр ине. Сит илдәрҙә ат культының ни тиклем көслө үҫешкәнен күрҙем. Мәҫәлән, венгрҙар хатта ҡала эсендә ат тоталар. Юл үткәргестәрҙә аттар бәйле тора. Үҙҙәре йылҡы ите ашамай, аттарҙы рухтарын һаҡлар өсөн үрсетәләр. Улар ҙа "Мадьяр атһыҙ мадьяр түгел" тиҙәр. Был программа дәүләттәренеке түгел, ә халыҡтыҡы.

Әле 9 майҙа Дағстанда атлы поход үтте. Унда Махачкалаға тиклем ун алты һыбай бер аҙна эсендә 370 саҡрым үтте. Беҙҙә "Башҡорт аты"нда парад

***✓ Беҙҙең әле атҡа бәйле 11 уйыныбыҙ бар, ә ҡаҙаҡтарҙа ундай уйындарҙың һаны 82. Беҙ ҡаҙаҡтарға ҡарағанда боронғораҡ халыҡ булғас, беҙҙең атҡа бәйле уйындарыбыҙ йөҙҙән ашыу булырға тейеш.***

# БАЙРАМДАРЫБЫҘ -

## сағылышы

ҡына булды, әммә ундай походтар юҡ. Үҙебеҙҙә үткәнде мин парад тип әйтә алмайым, сөнки унда кейем булырға тейеш. Беҙҙә иһә кем калуш, кем "Сургутнефтегаз" бушлатын, камуфляж кейгәндәрҙе атҡа мендерҙеләр ҙә, сафтан үткәрҙеләр.

Әлбиттә, был байрам кәрәк, һабантуй үҙе айырым байрам, сөнки ул ер эшкәртеүселәрҙең, фермерҙарҙың, һауынсыларҙың, тракторсыларҙың байрамы. Ә "Башҡорт аты" - ул милли байрам. Ул халҡыбыҙҙың яугирлыҡ традицияларына таянған, яугирлыҡты үҫтереүсе сара. Был байрамдың уртаһында башҡорт аты тора. Беҙҙә әлеге ваҡытта аттарҙы ите, ҡымыҙы өсөн үрсетәләр, әммә башҡа маҡсатта тотмайҙар. Минеңсә, "Башҡорт аты" сараһы атыбыҙҙы ошо йүнәлештә үрсетеү өсөн башланғыс та булырға тейеш.

Бер туған апайым Алтайға барған саҡта поезды туҡтатып, вагондарҙан төшөрөп, аттарға ултыртҡандар. Артабан улар Алтай тауҙары аша бер аҙна буйы һыбай барғандар. Аҙна үткәс, уларҙы тағы ла тимер юлына алып килеп, үҙҙәрен күтәп тороусы поезға ултыртҡандар. Икенсе көнөнә күпмелер юл үткәс, тағы ла аттарға күскәндәр.

**Зәкирйән Әминев:** XVIII, XIX, XX быуаттарҙа Рәсәйҙә, Францияла, Англияла, Америкала аттар тураһында энциклопедиялар донъя күргән. Уларҙың барыһында ла башҡорт аты хаҡында мәғлүмәт бар. Ул белешмәләрҙә шулай уҡ ҡалмыҡ, монгол аттары хаҡында яҙыла. Сауҙагәр халыҡтарҙың сауҙа аттары тураһында бер ниндәй ҙә мәғлүмәт уларҙа юҡ.

**Быларҙан сығып, шундай һығымта яһап буламы: тик яугир халыҡтарҙың ғына аттары була…**

**Зәкирйән Әминев:** Улай ғына ла түгел, башҡортта ир менән ат икеһе бер бөтөн булып ҡабул ителә. Ир-ат грек телендәге кентавр кеүек. Ат башҡорт тормошоноң айырылғыһыҙ бер өлөшө. Совет осоронда ат тоторға рөхсәт итмәй торғайнылыр. Кавалерия дивизияһында һуғышҡан ике олатайым да ат тотто. Властар килеп, аттарынан ҡотолорға ҡушһалар, улар: "Ниңә, ат менеп һуғышырға ярай ине бит, унда берәү ҙә тыймай торғайны", - тип ҡаршы торҙолар. Икеһе лә үлгәнсе аттан айырылманы.

1984 йылда Харьковта Ҡуҙкүрпәс атлы ҡаҙаҡ прокуроры менән осраштыҡ. Ул минән:

- Һинең нисә баш атың бар? - тип һораны.

- Юҡ, - тием.

- Мин берәүгә лә әйтмәйем, атың нисәү? Башҡорттоң аты күптер инде ул... - тип йәнә һорауын ҡабатлай был.

Баҡтиһәң, ул башҡортто атһыҙ күҙ алдына килтерә алмай икән. Икенсенән, минеке үҙенекенән әҙерәк булып ҡуймаһын тип ҡурҡҡан. Үҙенеке 38 баш икән.

**Юлай, былтыр "Башҡорт аты"нда мин һинең сабып барған килеш сәпкә атып тейгеҙеүеңә шаһит булдым. Бик еңел түгелдер быға өлгәшеүе. Өҫтәүенә, ат алға бара, шул уҡ ваҡытта вертикаль йүнәлештә лә (аҫҡа-өҫкә) хәрәкәт бара, етмәһә, ул саҡта көслө ел сыҡты, һин быларҙың барыһын да иҫәпкә алаһыңмы, әллә был тәжрибә һөҙөмтәһеме?**

**Юлай Ғәлиуллин:** Сәпкә эләгеү өсөн уйланыуыңды туҡтатып, шиктәреңде алып ташларға кәрәктер. Ә шундай-шундай параметрҙарҙы тап килтерәм, тип һанай башлаһаң, уңышһыҙлыҡҡа тап булаһың. Икенсенән, атың менән икәүең бер бөтөнгә әйләнеүең, бер-береңде тойоуың мөһим, ат барыһын да һиҙә һәм һиңә ярҙамға килә. Әлбиттә, бында күнекмәләр ҙә, тәжрибә лә кәрәк. Мәҫәлән, ғаилә хәлем буйынса мин йыл самаһы күнекмәләр үткәрмәнем һәм апрель айындағы ярышта 5-се урынға сыҡтым, ә күнекмәләр үткәргән егеттәр алға китте. Беҙҙең "Мәргән уҡсы" хәрәкәтендә ун дүрт кеше ат алған. Ҡалала йәшәүселәр ҙә атлы булған, улар аттарын "Аҡбуҙат" ипподромында тота. Өфө янындағы ҡасаба-ауылдарҙа йәшәүселәр ҙә ат үрсетә.

**Зәкирйән Әминев:** Ҡырмыҫҡалы районында йәшәгән элекке прокурор ҙа Баймаҡ районынан барып һатып алып ҡайтып, ат аҫырай. "Зәкирйән, нисек инде мин башҡорт була тороп, атһыҙ йәшәргә тейешмен. Ат минең өсөн күңел талабы", - тип аңлатты ул аттарға ҡарата һөйөүен.

**Беҙҙең милли йолалар, байрамдар, башҡа саралар бар, тағы ла ысын тормош бар. Тормош байрам түгел, белеүегеҙсә. Милли саралар тормоштағы ауырлыҡтарҙы еңергә нисек ярҙам итә тип уйлайһығыҙ?**

**Юлай Ғәлиуллин:** Күп кеше көн итеү хәстәре менән йәшәй. Ҡайҙалыр хеҙмәт итеүсе кис эшенән ҡайта ла, өҫтәмә килем эҙләп, тағы ла ҡайҙалыр сығып китә. Ундай кеше, һуңынан йәшәрмен әле, тип уйлай. Аҙаҡ үлер алдынан эшенән башҡа бер нәмәһе лә булмағанлығын аңлай. Үлер алдынан кеше барыбер ҙә тиҙәк түгеп, бесән сабып йөрөгәнен иҫкә алмай. Беҙҙә күптәр эшләй генә, йәшәмәйҙәр. Шул уҡ ваҡытта, әйтәйек, ҡулына ян алып, уҡ атыу менән шөғөлләнә башлаған кешенең маҡсаты барлыҡҡа килә. Уға яу кейеме лә кәрәк була, ҡулына янын алһа, атҡа атланғыһы килә. Йәғни бындай кешенең йәшәү мәғәнәһе була.

**Зәкирйән Әминев:** Бала саҡта яҙ ер ҡарҙан әрселә башлау менән ир балалары булған атайҙар ян яһай башларҙар ине. Беҙҙең атай ҙа муйыл ағасы алып ҡайтып, һәр ҡайһыбыҙҙың буйына ҡарап ян яһап бирә. Уҡ та юна, уға ҡауырһынды үҙебеҙ беркетәбеҙ, консерва ҡалайынан башаҡ яһап алабыҙ. Карьер янындағы тау өйөмө башында ҡар ирегәс, бар малайҙар шунда менеп баҫабыҙ. Тәүҙә һауаға, аҙаҡ бер-беребеҙгә тоҫҡап атабыҙ. Мәргәнлеккә лә, етеҙлеккә лә һынау тотабыҙ, йәғни осоп килгән уҡтан тайшанып өлгөрөргә тейешһең. Нисек беҙҙе Хоҙай аралағандыр, беребеҙгә лә уҡ ҡаҙалғаны булманы. Бер мәл минең уғым Айрат класташымдың кәпәсенә барып ҡаҙалды. Айрат аҡырып илап ҡасты, мин уны ҡыуып етеп, уғымды алып ҡалырға итәм, йәғни башағым әрәм була. Ҡыуып етеп, уғымды тартып алдым, башағы кәпәсендә тороп ҡалды. Һуңынан, үҫкәс, осрашҡан һайын Айраттан башағымды һораштым. Ҡыш буйына ҡылыс алыштыҡ. Балалар уйыны ул уйын ғына түгел, беҙ ошо рәүешле өлкәндәр тормошона әҙерләндек.

**Беҙ күп осраҡта ҡайҙандыр нимәлер көтөп йәшәйбеҙ. Ә бит рухыбыҙҙы тәрбиәләй торған йолаларыбыҙ, йола-традицияларыбыҙ барыһы ла үҙебеҙҙә бар. Беҙгә велосипед уйлап сығарырға түгел, барыһы ла үҙебеҙҙә: шанлы тарихыбыҙҙың бер сәхифәһен асыу менән ат тояғы тауыштары ишетелә башлай. Беҙгә, туҡталып ҡалмайынса, рухыбыҙҙы тергеҙер өсөн хәрәкәт итергә генә кәрәк. Шулай түгелме?**

**Юлай Ғәлиуллин:** Беҙгә кемдер килеп нимәлер эшләп бирер тип һалынырға өйрәнеү совет осороноң емеше. Бына нуғайҙар Әстерханда, Дағстанда, Чечняла, Ҡырымда, Ҡарасәй-Черкеста таралып йәшәйҙәр. Үҙҙәренең республикаһы юҡ. Шуға ҡарамаҫтан, телдәрен, йолаларын, аттарын һаҡлау юлы менән халҡын да һаҡлайҙар.

Беҙҙең әле атҡа бәйле 11 уйыныбыҙ бар: ылаҡ, бәйге, ауҙарыш һәм башҡа уйын, ә ҡаҙаҡтарҙа ундай уйындарҙың һаны 82. Беҙ ҡаҙаҡтарға ҡарағанда боронғораҡ халыҡ булғас, беҙҙең атҡа бәйле уйындарыбыҙ йөҙҙән ашыу булырға тейеш. Шуға күрә беҙгә уларҙы тергеҙеү бурысы тора. Әгәр ҙә дәүләт үҙенең өҫтөнә алһа, ул сараларҙы тергеҙеү йылдамыраҡ барыр ине. Шул уҡ ваҡытта дәүләткә генә һалышып ултырыу ҙа дөрөҫ түгел. Беҙгә әле атлы туризмды үҫтереү, джигитовканы яйға һалыу өлгөрөп еткән мәсьәлә. Был тәңгәлдә "Аҡбуҙат" ипподромын йолаларыбыҙҙы тергеҙеүгә йәлеп итеү маҡсатҡа ярашлы булыр ине.

**Зәкирйән Әминев:** Беҙҙә Ҡуңыр буға, Ҡанифә юлдары бар. "Ҡуңыр буға" тип аталһа ла, ул юл ат менән йөрөй торған стратегик яу юлы ла булған. Юл Урал һырты буйлап Свердловск яғына үтә. Ә Себер яғынан Ҡаҙан яғына икенсе юл килә. Был ике юл Верхнеуральскийҙа киҫешә. Түбәнге Тагилға тиклем һуҙылған юл буйында башҡорт ауылдары урынлашҡан. Һәр ырыу был юлдың үҙ биләмәһенән үткән өлөшөн контролдә тотҡан. Был юлдан үтеүсе сауҙагәрҙәр һәр ырыуға пошлинаһын түләй барған. Уларҙың тауарының һаҡланыуы өсөн шул ырыуҙар яуаплылыҡты үҙ өҫтөнә алған. Әгәр ҙә Ырымбур яғынан Себер яғына табан атлы туристик маршрут һалғанда тарихыбыҙҙы өйрәнеүҙә өр-яңы бит асылыр ине. Атлы маршрут буйынан үткәндә һәр урынға бәйле халҡыбыҙ тарихы бәйән ителһә, донъя кимәленә сығыр инек. Ана бит, Алтайҙар хатта поезды туҡтатып, пассажирҙарын атҡа атландыра алған...



**ШУЛАЙ ИТЕП...**

**Милли байрамдарыбыҙҙың ҡайһыһы хаҡында ғына һүҙ башлаһаҡ та, тарихыбыҙ, атыбыҙ, яу ҡоралдарыбыҙ, рухиәтебеҙ, милли булмышыбыҙ хаҡында һөйләшә башлайбыҙ. Тимәк, милли байрамдарыбыҙҙың әһәмиәте лә ошо ҡиммәттәребеҙҙән айырылғыһыҙ, асылыбыҙҙың сағылышы.**

**Әхмәр ҒҮМӘР-ҮТӘБАЙ**
**әңгәмә ҡорҙо.**

✓ *Скульптор һөнәрен һайлап, таштарҙан, ағастарҙан, балсыҡтан бәләкәй һындар яһаным. Ҡул көсө генә түгел, рух көсө лә кәрәк булды ул саҡта. Нәҫелемә, тамырҙарыма рәхмәт уҡыным тағы ла...*



*МАТУР ХӘТИРӘ*

# КӨСЛӨЛӘР НӘҪЕЛЕНӘНМЕН

**Ҡайһы бер шиғри юлдар бер уҡыуҙа уҡ хәтергә һеңеп ҡалыусан бит. Бына Рәми Ғариповтың "Ҡомдағы эҙҙәр" шиғырының һуңғы өлөшө ологайғас та йыш иҫкә төшә:**

*Ҡомдағы эҙ генә мәллә*
*Был һантый йәшлек үҙе?*
*Хәҙер уны юяһаҡ бит*
*Тулҡындары диңгеҙҙең!..*

**Йәшлекте ҡомдағы эҙҙәргә тиңләһә лә шағир, ҡайһы бер эҙҙәр шундай тәрән, диңгеҙҙәй ғүмерҙең тулҡындары ла юя алмай уны. Хатта бала саҡ эҙҙәре лә һаҡлана...**

* * *

Мәктәпкәсә балалар йортонда бик оло йәштәге Шәрифә исемле тәрбиәсе апай бар ине. Шаян балаларҙы ҡысҡырып тыйырға ла, әрләргә лә хәле булмағандыр уның. Шуға, тынламаған баланы семетә, йә ҡолағын бора. Ауыртыуҙан сәрелдәгән баланың тауышы сит яҡҡа ишетелмәһен өсөн: "Әлиләү генәйем, бәлиләү генәйем..."- тип йырлай ине үҙе. Апайҙың ул холҡон белгәнгә күрә, ул килгән көндә бик шым, баҫалҡы ғына йөрөйбөҙ. Бына бер саҡ киске ашҡа ултырҙыҡ. Йәй. Бер бәйләнсек себен минең тәрилкәмә килә лә ҡуна, килә лә ҡуна. Мин шым ғына: "Эй, себенкәй, һин дә асыҡтыңмы? Минең буткама теймә. Мин һиңә өлөш сығарам, аша", - тип ҡалағымдың осо менән кескәй генә өлөш сығарып, өҫтәлгә һалып та өлгөрмәнем, Шәрифә апай ҡолағымдан эләктереп алып, йырлай-йырлай мине мөйөшкә алып барып баҫтырып та ҡуйҙы. Себен рәхәтләнеп ашағандыр инде буткамды, тик мин ас ҡалдым. Сабыйлыҡ инде.

Ул сабыйлыҡты Башҡорт иле лә дауам итә. Бында, тегендә өлөш сығара-сығара, ярым ас ҡалабыҙ, ә "тәрбиәселәр" ҡолағыбыҙҙы борғолап ҡына тора: "Әлиләү генәйем, бәлиләү генәйем... Әсмәбикә тыпырлатып бейеп килә генәйем... "

* * *

Рәми Ғарипов шиғырындағы ҡомда ҡалған эҙҙәр тураһындағы юлдарҙы иҫләп, тағы ла бер иҫтәлекте хәтергә төшөрҙөм. 5-се синыфты тамамлап, йәйге дачаға ял итергә барҙыҡ. Һәр саҡтағыса, дачаны асыу һәм ябыу байрамдары бик күңелле үтә. Тантаналы йыйылыштан һуң төрлө уйындар уйнайбыҙ. Йә скакалкала һикереү, йә яулыҡ менән күҙҙәрҙе ҡаплап, епкә эленгән кәнфиттәрҙең береһен ҡайсы менән ҡырҡып алыу, йә бау тартышыу һ.б. Ул уйындарҙы мин дә уйнап ҡараным, тик бер талон да ота алманым. Ул талондарҙы отҡандар инде печенье, кәнфит ашап йөрөйҙәр (ашханаға барып, талондарын тапшырып алалар ул ризыҡтарҙы балалар). Эй, минең күҙем ҡыҙа. Йүгерек тә, оҫта һикереүсе лә түгелмен шул.

Бер өҫтәл янына барһам, унда "ҡул көрәше" уйнайҙар. Мин дә көсөмдө һынап ҡарарға булдым. Тәүҙә Әлфиәне һәм Әнүзәне еңдем, аҙаҡ Мәһинурҙы, хатта минән күпкә оҙон буйлы Фәкиһәны ла еңдем. Дүрт талон отоп, ашханаға йүгерҙем. Ике кәнфит, ике печенье алып, һыйланып, көс йыйып, тағы шул уйынға йүнәлдем, тик "Байрам тамам" тинеләр. Бер ҡыҙҙан да еңелмәүемә аптыраным, әлбиттә.

Бына уҡыу йылы алдынан йыйылыш үткәрҙеләр. Мин завуч апай янында ултырам. Еңһеҙ ҡулдаҡ кейгәнмен. Шул саҡ завуч апай минең ҡулдарыма ҡарап, аптыраулы һорау бирҙе: "Ҡулдарың ҡалай көслө. Ниңә? Ни өсөн?" "Әлләсе..." тип, мин дә аптыраным. Ҡулдарымдың мускулдары ҡалҡып тора. Йәйге уйындан, завучтың һорауынан ҡул көсөм һәйбәт икәнен аңланым. Тик ниңә, ни өсөн ҡаҡса ғына һынлы, кескәй генә буйлы ҡыҙыҡайға көслө ҡулдар бирелеүен аңлай алманым ул саҡта.

Бына мәктәпте тамамлағас, тыуған ауылымды эҙләп, районға сығып киттем. Кем мин, туғандарым бармы? Директор юлға аҡса бирҙе. Ике көн эҙләнем, һораша-һораша йөрөп таптым. Мине иң ғәжәпләндергәне атайымдың атаһы булды. Шәмсетдин олатайым 90 йәшкә еткән, оҙон буйлы, көслө ҡуллы. Тимәк, мин көслө ҡуллылар нәҫеленән булып сығам, тип уйланым ул саҡта һәм шәжәрәмә рәхмәт уҡыным. Һуғыш ваҡытында, аслыҡта тыуып үҫһәм, балалар йортонда тәрбиәләнеүҙең әсе-сөсөһөн татыһам да, ана шул көслөләр ҡаны мине бар бәләләрҙән йолоп ҡалған. Һуңынан скульптор һөнәрен һайлап, таштарҙан, агастарҙан, балсыҡтан бәләкәй һындар яһаным. Ҡул көсө генә түгел, рух көсө лә кәрәк булды ул саҡта. Нәҫелемә, тамырҙарыма рәхмәт уҡыным тағы ла...



* * *

Хатымды тамамлайым тигәйнем дә, "рух" көсө тип яҙғас, миҫал кәрәк бит. Ул миҫалдарҙы бик күп яҙырға булыр ине. Бер бәләкәйен генә яҙып үтәйем. Мәктәпте тамамлап, Мәскәүгә уҡып йөрөйөм. Рәссамдарға кәрәкмәһә лә, "Политэкономия" фәнен өйрәтәләр. Бына имтихан көнө лә етте. Ҡурҡышымдан бик яҡшы әҙерләнеп барҙым. Мейем саф, хәтерем һәйбәт, ниңә ҡурҡҡанмындыр? Билет алып әҙерләндем дә, оло йәштәрҙәге уҡытыусы ҡаршыһына ултырып, яуап бирәм. Һәйбәт белеүемә шатмын, йылмайып һөйләп бөткәйнем, уҡытыусының: "Ярай, өс ҡуям", - тип әйтеүенә һушым китте. Яуап биргән мәлдә уның иғтибар менән тыңламауын һиҙенкерәгәйнем, әлбиттә. Ҡап-ҡара мосолман балаһы "Политэкономия" тигән ҡатмарлы фәндә өслө билдәһенә бәлһә лә хуп, тигәндер ул. Ныҡыш кешемен мин. Тыныс, әммә ҡаты тауыш менән: "Мин бөтә һорауҙарға ла дөрөҫ яуап бирҙем. Ышанмаһағыҙ, тағы өҫтәлмә һорау бирегеҙ!" - тинем. Оло ағай уянып киткәндәй, миңә аптырап ҡараны ла, яңы һорау бирҙе. Бынныһында йылмайып түгел, шатырҙатып яуап бирҙем. Уҡытыусы: "Ысынлап та һәйбәт әҙерләнеп килгәнһең, дүртле ҡуям",- тине лә, "Ризаһыңмы?" тигәндәй, миңә тағы ҡарап ҡуйҙы.

Имтихандан һуң коридорға сыҡҡас, "Үәт, башҡорт балаһы!" тип, үҙемде маҡтап ҡуйҙым. "Бер ҡайҙа ла биреш торма!" тип өҫтәнем аҙаҡ. Беренсе курста минең турала курсташтарым: "Пришла маленькая, худенькая, нерусская и самый большой планшет взяла", - тип күршеләргә көләп һөйләгәндәр. Курсташтарымдың да, уҡытыусыларымдың да һәйбәт мөнәсәбәтен тойоп уҡыным. Һүрәт буйынса уҡытыусым: "Тәүҙә һине күреп борсолғайным да, тырышлығыңды күреп, тынысландым", - тип тә маҡтап ҡуйыуы иҫемдә. Көслөләр нәҫеленән булыуым бына шулай һәр аҙымда ярҙам иткәндер, тип уйлайым хәҙер бала саҡ, йәшлектең "ҡомда ҡалған эҙҙәрен" хәтерләп.

**Фәүзиә УСМАНОВА-ЯХИНА.**

**Редакциянан: Башҡортостандың атҡаҙанған скульпторы Фәүзиә апай Усманова "Киске Өфө" гәзите сыға башлағандан алып иң әүҙем уҡыусыбыҙ һәм авторыбыҙ булды. Ябай ғына автор түгел ине ул. Гәзитебеҙҙең һәр номерындағы берәй мәҡәләнең фекерен әйәртеп, үҫтереп, дауам итеп, ғәжәп матур миҫалдар килтереп, һығымталар яһап, аҙна һайын хат ебәрә һала ине редакцияға. Фәүзиә апай һымаҡ мәғлүмәтле, хәтирәләргә бай, башҡорт әҙәбиәтен яҡшы белгән, тел оҫтаһы булған авторҙар бик һирәк ул, ә бөгөнгө заманда улар бөтөнләй юҡҡа тиң, киләсәктә, бәлки, бөтөнләй булмаҫ та. Журналист Сәрүәр Сурина Фәүзиә апайыбыҙҙың "Киске Өфө"лә баҫылған ысын публицистик парсалар өлгөһө булған мәҡәләләрен йыйып, һабаҡташтары ярҙамы менән китап итеп тә баҫтырып сығарғайны.**

**Был көндәрҙә ошо һоҡланғыс шәхес, талантлы ижадсы Фәүзиә апай Усманова (гәзиттә ул йышыраҡ Фәүзиә Яхина тип баҫыла торғайны) баҡыйлыҡҡа күсте. Ауыр тупраҡтары еңел, гүрҙәре яҡты, иманы юлдаш булһын! Балаларының ауыр ҡайғыһын уртаҡлашабыҙ.**

*ХӘТЕРКИТАП*

# КЕР ҺАБЫНЫ




Һатыу нөктәһендәге хужалыҡ әйберҙәре бүлегенә боролғас, кәрәкһеҙ нимәләй бер як ситкә һалынған кер һабынын ҡулыма алып, уны танауыма яҡын килтереп, бер аҙ онотолоп торҙом.

Һәр һатып алыусының мәнфәғәтен күҙәтеүсе, теләктәрен һүҙһеҙ үтәүсе һатыусы ҡыҙ янымда пәйҙә булды.

- Здравствуйте, еще каким товаром интересуетесь, вам дополнительно что-нибудь предложить?

- Добрый день, спасибо, не надо, все на виду.

- Тогда, прошу прощения, что вы делаете?

- Как видите, нюхаю мыло, или подобная странная выходка запрещена у вас?

- Что вы! Это самое дешевое, хозяйственное мыло, к слову, его никто не покупает, могу показать другие, более современные варианты.

- Поверьте, для меня оно самое лучшее.

- Чем же она пахнет, эта дешевка?

- Матерью пахнет, моей мамой пахнет...

Йәш ҡыҙ миңә аптыраңҡырап, юғарынан аҫҡа ҡараны ла, сәйер кешене, йәғни мине ҡалдырып, китеп тә барҙы.

Әсәйем ныҡ сирләп, башҡаса тормаҫ өсөн түшәгенә ятҡас, барлыҡ эштәремде ситкә ҡуйып, әргәһенән бер аҙым да китмәскә ҡарар иттем. Табип тәҙәйенләгән уколдарҙы ҡаҙайым, системалар ҡуям, сир төҫө юйылмаҫмы, тип, һары төҫ һеңешә барған биттәрен усым менән ҡат-ҡат һыпырам, сәстәрен тарайым, һорағанын, йәне телүгәнен һә тигәнсе алдына килтереп һалам, тик көсө, ҡарыуы ҡайта барған әсәйемдең һүрелә барған өмөтө, ана һүнәм, бына һүнәм, тип леп-леп килгән йәшәү сырағы ише теләктүтенестәре лә кәмегәндән-кәмей бара. Күп ваҡыт ул түшәмгә төбәлеп, өнһөҙ-һүҙһеҙ ята. Мин үҙем дә күктән, әсәйемә инселәп, Тәңре төшөрөр сәләмәтлекте көтөп, ымһынып таш һындай һерәйгәнмен. Тормошҡа һис ҡасан ашмаҫтайҙы көтөүҙән дә ауырыраҡ, ғазаплыраҡ нимә юҡтыр ул был донъяла.

- Берәй нимә ашағың киләме әллә, әсәй? - тип өндәшәм ауыр тынлыҡты боҙоп.

Ә ул кипкән ирендәрен ялап ҡуя:

- Һин сығып, юғалып торған арала эсем һыртыма сыҡҡансы һыйланып алдым у!

Күҙгә ҡарап алдаша, мине генә түгел, үҙен дә шулай әүрәтә.

- Улайһа ни эшләйем?

- Тик кенә, ултырайыҡ, йәме, мин һинең бала сағыңды хәтерләп ятырмын, ә һин мәҙаһыҙлауҙарымдан бер аҙға ғына буһа ла ял итеп, арынып ал. - Шунан миңә оло кинәнес килтерер мәшәҡәтен дә уйлап таба. - Күрше-тирә бик йыш инеп-сыҡҡылай, әллә ялбырап киткән сәстәремде рәткә килтерәйекме?

- Әйҙә һуң! - ҡыуанып китәм. - Бөҙрәләп ебәрәйекме? - Тәнде-йәнде баҫҡан ауырлыҡ сигенмәҫме бер аҙға ғына булһа ла, тип, мәрәкәләп ебәргән булам.

*ЖУРНАЛИСҠА ӨС ҺОРАУ*

# РАДИОНЫҢ ТӘРБИӘҮИ КӨСӨНӘ...

## бөгөнгө балаларҙы ла йәлеп итәйек

**Башҡортостандың атҡаҙанған матбуғат һәм киң мәғлүмәт хеҙмәткәре, республиканың радио-телевидение тармағы ветераны Фәнүзә Баһауетдинованы радиотыңлаусылар үҙ эшенә мөкиббән киткән тынғыһыҙ журналист, яғымлы тауышлы алып барыусы тип белә. Һүҙ - Фәнүзә Кинйәмырҙа ҡыҙының үҙенә.**



**➔ 35 йыл ғүмерен радиоға биргән журналистан шулай тип һорарға мөмкиндер: эфирҙың көсө нимәлә, бөгөнгө көндә радионың урынын тормошобоҙҙа нисек билдәләр инегеҙ?**

- Эйе, тәүге тапҡыр эфирға сығыуыма ла 35 йыл ғүмер уҙып киткән. Хеҙмәт юлымды Башҡортостан радиоһынан башлаһам, хәҙер 15 йыл инде "Ашҡаҙар" радиоһында эшләйем. Эш буйынса төрлө ҡатлам кешеләре менән осрашырға тура килә. Ҡайһы саҡ бөтөнләй радио тыңламаған, гәзит-журнал менән ҡыҙыҡһынмаған, хатта телевизор ҡарамаған кешеләр ҙә осрай. Ғәфү итһендәр, мин ундайҙарға хайран ҡалам. Нисек инде, мәҫәлән, радио тыңламаҫҡа мөмкин! Беҙҙең ғаиләлә бала саҡтан радио яңғырап торҙо. Мәктәптә уҡыған йылдары иртәнге концертты ишетеп уянып китә инем. Һәр аҙна ял көндәрендә төшкө 12-нән спектаклдәр башланыр ине. Уны бүлеп биргән осраҡтары ла була, иртәгәһенә дауамын көтөп ала инем. Дикторҙар уҡыуында шиғыр тыңларға яраттым. Бәлки, ошо радионың көсө менән шул мәлдәрҙә минең күңелемдә әҙәбиәт-сәнғәткә һөйөү уянғандыр ҙа. Иртәнге, төшкө, киске, ял көндәрендәге концерттарҙы алып барыусы дикторҙарҙың моңло тауышына ғашиҡ инем.

Әйткәндәй, беҙ мәктәптә уҡыған йылдары класташтар араһында анкета тултырыу йолаһы бар ине. Ябай дәфтәрҙең һәр битендә бер һорау. "Киләсәктә кем булырға теләйһең?" тигәнгә, мин: "Диктор, әртист йәки уҡытыусы", - тип яҙа торғайным. Хәҙер инде ошо уҡ эфир көсө менән диктор ҙа, әртист тә, уҡытыусы ла булдым, тип әйтә алам. Бәлки, атай-әсәйем аңлы рәүештә шулай тәрбиә бирергә тырышҡандыр. Сөнки, атайым әҙәбиәтте ярата ине, ҡулында һәр ваҡыт "Ағиҙел" журналы булды, хатта битен журнал менән ҡаплап йоҡлап китер ине. Ә әсәйем клуб директоры булып эшләгәс, сәнғәттең уртаһында ҡайнап йәшәне, мине лә һәр ваҡыт үҙе менән йөрөттө һәм иң беренсе булып микрофонды ла ҡулыма әсәйем тотторҙо. Йылдар үтер ҙә, республика радиоһында микрофон алдында концерт номерҙарын үҙем дә иғлан итеп ултырырмын тип уйламағайным. Минең өсөн ул буй етмәҫлек бер хыял ине. Ваҡытында үҙҙәре белепме, әллә осраҡлымы, радио көсө менән миңә тейешле тәрбиә бирә алғандарына оло рәхмәтлемен.

Мин үҙемде республиканың мәҙәниәт, сәнғәт, матбуғат, мәғариф арбаһында китеп барған кеүек хис итәм. Иртә менән эшкә йыйынғанда БСТ-нан "Сәләм"де ҡарайым, аш бүлмәһендә "Ашҡаҙар" радиоһы һөйләй, машинала "Юлдаш"ты тыңлайбыҙ. Эшкә килгәс, "Киске Өфө" гәзитен күмәкләп уҡыйбыҙ, матбуғат донъяһынан тағы ла ҡыҙыҡлы мәғлүмәттәр менән бүлешәбеҙ. Йәйге ял мәлдәрендә, ғәҙәттә, ауылға ҡайтҡан саҡта төрлө сәбәптәр менән бер аҙ матбуғат донъяһынан айырылып торған ваҡыттар ҙа була, шул саҡ мин ана шул республиканың мәҙәниәт, сәнғәт, матбуғат, мәғариф арбаһынан төшөп ҡалғандай булам, күңелде ниндәйҙер бушлыҡ биләп ала, хатта ниндәйҙер кимәлдә үҙемде ас тоям, ашайһың да кеүек, әммә туйып булмай. Йәйге ялдан һуң эшкә сығып, республика матбуғаты менән танышып, ниндәйҙер мәғлүмәт алғандан һуң, үҫеп киткәндәй булам һәм бөтәһе лә үҙ урынына ултыра ла, артабан шул арбала тормош дауам итә.

Радио - ул тыңлаусының ваҡытын алмай, эшеңде лә эшләп йөрөйһөң, әллә күпме мәғлүмәтле булаһың. Мәғлүмәтле тигәндән, радио фондында күпме шәхестең тауышы, фекере, мәшһүр йырсылар, ҡурайсыларыбыҙҙың сығышы яҙылып ҡалған, тарихи һәм милли йолаларыбыҙ тураһында тапшырыуҙар, спекталдәр, яҙыусы-шағирҙәр әҫәрҙәре - һәр береһе алтынға тиң хазина бит. Әгәр ҙә йәштәребеҙ күңелендә радиоға ҡыҙыҡһыныу уята алһаҡ, ошо хазина быуындан-быуынға тапшырылыр, киләсәк сылбыры өҙөлмәҫ ине. Хеҙмәт юлымда фонотека бүлегендә лә эштең ҡыҙыу мәленә эләктем. Яҙмалар араһында милләтебеҙҙе данлаған шәхестәр - Рәми Ғарипов, Арыҫлан Мөбәрәков, Ғәзиз Әлмөхәмәтов, Әмир Абдразаҡов, Зәйнәб Биишева, Мостай Кәрим һ.б тауыштары һаҡлана. Үлсәмдәргә һыймаған байлыҡ был, шуларҙы мәктәптәрҙә лә дәрес барышында ҡулланырға кәрәк ине ул.

**➔ Фәнүзә, һеҙ йырлы-моңло ғаиләлә тыуып үҫкәнһегеҙ. Әсәйегеҙ Фәрзәнә апай ғүмер буйы ауыл мәҙәниәт йортонда эшләгән. Сәнғәткә һөйөү ғаиләнән һалынған. Ошо уҡ мөнәсәбәт һеҙ ҡорған ғаиләлә сағыла. Ике ҡыҙығыҙ ҙа йырмоңға маһир, йәғни, милли мәҙәниәтебеҙгә үҙ өлөштәрен индерәләр. Ҡала мөхитендә рухлы башҡорт тәрбиәләүҙең үҙенсәлеге нимәлә?**

- Ғаиләбеҙ сәнғәткә ғашиҡ. Әсәйем Фәрзәнә миңә тәү башлап микрофон тотторҙо, тигәйнем инде, сәнғәт донъяһына әйҙәүсе ул булһа, атайым Кинйәмырҙа - Баһауетдиновтар нәҫеленән тәү башлап юғары уҡыу йортона ишек асыусы. Әммә ауыр йылдарҙағы ғаилә хәлдәренә бәйле, уҡыуын тамамлай алмай. Шуға биш ҡыҙының да белем алыуын теләне, һәр ваҡыт изге теләктә торҙо.

Бала саҡтан атайымдың әсәһе Фәйрүзә ҡартинәйем тәрбиәһен алдыҡ. Ул беҙҙең өйҙөң йәме булды, тип ғорурлыҡ менән әйтәм. Һәр ваҡыт ишегебеҙ асыҡ ине. Ҡыҙғанысҡа ҡаршы, хәҙер шул ишеккә оло йоҙаҡ эленде... Яҡындарыбыҙ мәңгелек йорттарына күсте. Улар һәр саҡ күңелдә, ҡәҙерлеләремә минең рәхмәтем сикһеҙ. Әсәйем ейәнейәнсәрҙәренә лә талапсан булды, ауылға ҡайтҡас та, туған телегеҙҙә һөйләшегеҙ, тип әйтә килде. Кем таҙа, матур һөйләшә - маҡтау һүҙҙәрен йәлләмәне. Ҡала мөхитендә үҫеү генә түгел, урта белемде урыҫ мәктәбендә алыуҙарына ҡарамаҫтан, ҡыҙҙарыбыҙ Гөлйемеш менән Гөлгөнә башҡорт телендә кинәнеп һөйләшә, йырлай, байрам кисәләрен алып баралар. Улар икеһе лә Өфөнөң 18-се башҡорт балалар баҡсаһына йөрөнө, телгә һөйөү һәм ҡыҙыҡһыныу уятыуҙа тәрбиәселәрҙең дә өлөшө бар. Бигерәк тә ғаилә йоғонтоһо көслөрәк, тип уйлайым. Ҡыҙҙарымдың атаһы Мирсәйет Ҡылысов менән икебеҙ ҙә туған тел нескәлектәрен аңлаған ижадсыларбыҙ. Атайҙарының балалар өсөн яҙған "Башҡортостан - илкәйем", "Әсәй-әсәкәйем", "Ҡояш-ата, ер-әсә", "Нефтле ил", "Яңы йыл" һ.б шиғырҙарына тыуған йырҙары аша ла ҡыҙҙарыбыҙ күңеленә йыр сәнғәтенә ойотҡо һалынғандыр. Күп тапҡырҙар ишеткәнем бар, атай-әсәйҙәр: "Бына мәктәптә тел өйрәтмәйҙәр", - тиҙәр. Ғәфү итегеҙ, минеңсә, телгә тик ғаиләлә генә өйрәнеп була... Һәр ғаилә, тәү сиратта, үҙенән башларға тейеш, иң беренсе атай-әсәй үҙе туған телендә һөйләшһә, ҡартәсәй менән ҡартатай шулай уҡ ейән-ейәнсәрҙәре менән тик үҙебеҙсә аралашһа, уңыш оҙаҡ көттөрмәҫ ине. Әйткәндәй, тағы ла беҙҙең ҡыҙҙарыбыҙ каникул ваҡытында Мәрйәм Бураҡаеваның программаһы нигеҙендә төҙөлгән "Йәйләү"ҙә ял иттеләр.

Балаларыма Өфөләге байтаҡ шәхестәр танышыу бәхете лә тейҙе. 3-4 йәштәрендә Сафуан Әлибаев менән осрашып уның "Кем нимә ти?" шиғырын яттан һөйләп, ағайҙы илатҡансы ҡыуандырғайнылар. Башланғыс класта уҡыған саҡта балаларҙы Кәтибә Кинйәбулатоваға алып барҙым, уның китаптарын тотоп ҡарап, мандолинала уйнағанын тыңлап, өйгә ҡайтҡас Гөлгөнә шиғыр ҙа яҙып ҡуйғайны. Алтмыш телдә йырлаған Мәғфирә апай Ғәлиеваның өйөндә һаҡланған милли күлдәктәрҙе күреп, хайран ҡалғайнылар. Шулай уҡ мәшһүр йырсыбыҙ Фәрит ағай Бикбулатовты яҡындан күреп, "олатай", тип тығыҙ аралашып үҫте ҡыҙҙарыбыҙ. Улар менән иҫтәлеккә төшкән фотоһүрәттәр бөгөн дә һаҡлана. Тел мәсьәләһендә махсус бер ни ҙә талап итмәнек, әммә мөхит булдырғанбыҙҙыр.

**➔ Тел өйрәнеүҙең мәктәптә үҙ үҙенсәлеге бар. Һеҙҙеңсә, нимәгә иғтибар итергә кәрәк?**

- Уҡытыусылар дәрестә гәзит-журналдарҙы ҡулланһын ине, мәктәп уҡытыусылары күберәк матбуғатҡа яҙылһындар, дәрестәр республика тормошонан яңылыҡтар менән башланһын ине. Шулай уҡ мәктәптең тәрбиә эштәрен ойоштороу планына сәхнә теле дәресен, микрофон менән эшләү алымдарын тәҡдим итер инем. Сөнки эш тәжрибәмдән сығып әйткәндә, етәксеме, ябай эшсеме, микрофонды күргән һәр кем тулҡынлана башлай, әгәр ҙә мәктәп йылдарынан уҡ бала микрофонға өйрәнһә, әйтер һүҙҙе һис ҡаушамай еткерә алыр ине, тип уйлайым.

Ә радио - ул тыңлаусыны тәрбиәләүсе, телгә өйрәтеүсе, ҡыҙыҡһыныу уятыусы, республика тормошон яҡтыртып, уның йылъяҙмаһын яҙыусы. Ошондай яуаплы эштә минең дә өлөшөм булыуына ҡыуанам да, ғорурланам да. Артабан да быуындарҙы-быуындарға бәйләп йәшәргә яҙһын, рухи байлығыбыҙҙы йәш быуынға тапшыра алһаҡ, был киләсәк алдында торған иң ҙур бурысыбыҙҙы үтәү булыр ине.

**Фәрзәнә АҠБУЛАТОВА**
**һорауҙар бирҙе.**

---

- Бөҙрә сәс, бөҙрә тормош йәштәргә килешә, ә минекенә сайыштырыу ҙа бара.

- Хәҙер плитәлә һыу йылытам да, "Пантин" тигән шәп шампунде килтерәм. Сифатлы нәмә күпертеп, ҡабартып, сәсәтәрҙе шымартып ебәрә.

- У әллә ниндәй нимә һеҙгә килешәлер ҙә, бәлки. Ғөмөрөм буйы сәстәремде кер һабыны менән йыуып, көл тоноғо менән сайҡатҡанымды беләһең...

Һорағанын, талап иткәнен табам. Йоҡарып, ап-аҡ ҡылғанға ҡалғанға күпме генә һабын кәрәк тиһең! Эшемде ослайым да сәстәрҙе тарарға керешеп китәм.

- Толомдарым әүәле, ишелеп, билемә ҡәҙәр төшөп тора торғайнылар.

- Улар хәҙер ҙә насар түгелдәр!

- Кәзә ҡойроғон күрә тороп юҡты әйттең ошо урында! Балам, тағы ла бер мыжығымды башҡар ҙа... Массаж кремыңды бер ситкәрәк ҡуйып, арҡамды иретелгән ҡаҙ майы менән һылаштыр сәле. Түҙер әмәлем ҡалманы, ярылып бара.

Бик тырышып ҡаҡ һөйәккә ҡалған, ҡырғыстай арҡаны майларға керешеп китәм...

Ҡаҙ майы, кер һабыны... Ғәзиз әсәйҙе хәтерләткән һәр нимә шулай ҡәҙерле, күңелгә яҡын булалыр ул. Ә бына бар көнкүреш бысрағын һыпырып, йыуып төшөргән кер һабынының еҫен еҫкәһәм, әсәйемдең аҡ сәсле башына сал башымды эйгәндәй булам!

**Хәйҙәр ТАПАҠОВ.**

✓ *Беренсенән, был мәктәп программаһындағы етешһеҙлек. Тыуған яҡты өйрәнеүгә иғтибар һәм уҡыу ваҡыты бик аҙ бирелә. Икенсенән, муниципалитет масштабында тарихи хәтерҙе һаҡлау буйынса аныҡ эш программаһы юҡ.*



ИНТЕРНЕТТАН



# КӨН ТӘРТИБЕҢДЕ ҮҘГӘРТ

■ Белгестәр иҫәпләп сығарыуынса, кеше үҙенең ғүмеренең дүрттән бер өлөшөн йоҡлап үткәрә. Эштә коллегалар менән аралашыу, шулай уҡ социаль селтәрҙәр яҡынса 9 йыл ғүмерҙе ала. 3 йыл - транспортта эшкә йөрөүгә сарыф ителә, магазиндар буйлап йөрөүгә шулай уҡ дөйөм 4 йыл тирәһе ваҡыт кәрәк. Шуға ла ғалимдар көн тәртибен ныҡлап уйлап, кәрәкмәгән күп нәмәләрҙән баш тартырға кәңәш итә.

■ Ултырып эшләгән кешеләрҙә хроник сирҙәр йышыраҡ осрай, ти Канзас университеты ғалимдары. Һынауҙарҙа 45 йәштән 65 йәштәге ир-егеттәр ҡатнашҡан. Көндөң 4 сәғәттән артығыраҡ ваҡытын ултырып эшләүселәр араһында яман шеш сире, диабет, йөрәк-ҡан тамырҙары сирҙәре йышыраҡ осраған. Бигерәк тә водителдәр һәм офис хеҙмәткәрҙәре араһында был күренеш киң таралған. Кешенең ауырлығы, йәше, матди һәм социаль хәле, шулай уҡ белеме мөһим түгел.

■ Бала ҡулдарының әүҙемлеге ни тиклем юғарыраҡ булған һайын уның фекерләү ҡеүәһе лә тиҙерәк үҫешә, бала яҡшыраҡ һөйләшә. Белгестәр шуға ла китапты баланың ҡулына иртәрәк тоттороорға кәңәш итә. Ул уның биттәрен асырға маташҡанда ла, биттәрен һыйпап ҡарағанда ла ҡулдарға массаж яһала. Шулай уҡ балалар китаптары тәҡдим итеүсе етештереүселәрҙең төрлө уйынсыҡ формаһында яһалған китаптар ҙа бик уңайлы.

■ Йәшәү кимәле юғары булған илдәрҙә йәшәүселәрҙең ғүмер оҙайлығы күберәк, һаулығы ла яҡшыраҡ, әммә иң бай илдең дә оло кешеләре хәтер насарайыуы менән яфалана. Ғалимдар раҫлауынса, өлкән йәштә лә теүәл аҡыллы булып ҡалыуға кешенең йәмғиәттәге статусы, байлығы түгел, ә даими рәүештә уйлау, фекерләү талап ителгән эштә эшләүе ярҙам итә. Эше стандарт булмаған мәсьәләләрҙе хәл итеү менән бәйле булғандар хаҡлы ялға сыҡҡас та юғары менталь статусын һаҡлап ҡала.

■ Швеция ғалимдары белдереүенсә, йоҡоһоҙ үткәрелгән төн баш мейеһенә насар йоғонто яһай, был хатта баш йәрәхәте алғандағы кеүек эҙемтәләргә эйә. Мәҫәлән, баш мейеһе һелкенгәндә ҡанда химик матдәләр кимәле күтәрелә, йоҡоһоҙ үткәргән төндән һуң ҡанда ошондай уҡ процестар күҙәтелә. Уппсала университеты ғалимдары төндә йоҡламаған бер төркөм кешеләрҙән ҡан анализы ала. Уларҙың ҡанында NSE һәм S-100B матдәләре кимәле күтәрелгән була, улар шулай уҡ баш йәрәхәте - мейе һелкенеүен билдәләүсе күрһәткестәр иҫәпләнә. Элегерәк ғалимдар кеше йоҡлаған саҡта баш мейеһенең көн дауамында йыйылған токсиндарҙан таҙарыныуын асыҡлағайны. Үҙ сиратында, токсиндар алда телгә алынған матдәләрҙең кимәле күтәрелеүгә лә килтерә, был мейе туҡымаһын юғалтыуға булышлыҡ итә.

МӨҺИМ ТЕМА

**"Шүлгәнташ мәмерйәһе" тарихи-мәҙәни музей-ҡурсаулығы Рәсәй Федерацияһы халыҡтарының мәҙәни мираҫ объекттарының (тарих һәм мәҙәниәт ҡомартҡыларының) Берҙәм дәүләт реестрында тәбиғәт ҡомартҡыһының исемен алмаштырыу өсөн документация әҙерләгән. Билдәле булыуынса, мәмерйә реестрға "Палеолит осоро һынлы сәнғәте менән Капово мәмерйәһе" федераль әһәмиәттәге мәҙәни мираҫ объекты тип теркәлгән. Тиҙҙән унда, ЮНЕСКО-ға ебәрелгән номинация досьеһындағы кеүек үк, мираҫ объекты "Палеолит осоро һынлы сәнғәте менән Шүлгәнташ мәмерйәһе" тип яҙыласаҡ. Был хаҡта "Мираҫты һаҡлайбыҙ" түңәрәк өҫтәлендә сығыш яһап, музей-ҡурсаулыҡ директоры Фәүзил Маликов хәбәр итте.**

# ТӨБӘКТЕҢ ЕР-ҺЫУЫНЫҢ...

## боронғо атамалары боҙолмаһын!



"Шүлгәнташ" музейында тыуған яҡты өйрәнеүселәрҙе, Бөрйән районының тарих уҡытыусыларын, район хакимиәте, тәбиғәт ҡурсаулыҡтары вәкилдәрен, туроператорҙарҙы, Белорет педагогия колледжы уҡытыусыларын һәм студенттарын берләштергән түңәрәк ҡор сараһы үтте. Музей-ҡурсаулыҡ директоры аңлатыуынса, сараның маҡсаты - урындағы матди булмаған мәҙәниәтте һаҡлауҙың көнүҙәк мәсьәләләрен тикшереү, халыҡ риүәйәттәрен һәм легендаларын йыйыу һәм системалаштырыу буйынса көстәрҙе берләштереү.

- Шүлгәнташ мәмерйәһе һәм бөтәһенә лә билдәле Ығышма һәм Йылҡысыҡҡан карст күлдәре урынлашҡан "Урал батыр ере" биләмәһендә туристар араһында популяр булған бик күп ҡыҙыҡлы урындар бар, - тип билдәләне Фәүзил Маликов. - Тәжрибә күрһәтеүенсә, улар үҙҙәренең тарихи исемдәре менән билдәле түгел. Мәҫәлән, Аҡбулат мәмерйәһен туроператорҙар "Әкиәт" мәмерйәһе тип рекламалай, Күлйорт-тамаҡ беҙҙә Космонавтар мәмерйәһенә әйләнде. Бындай миҫалдар күп. Белемде системалаштырыу буйынса эш башлау өсөн район тыуған яҡты өйрәнеүселәренең уҡытыусылар, студенттар, туроператорҙар менән осрашыуын ойоштороорға теләнек. Быуаттар төпкөлөнән беҙгә килеп еткән бай мираҫыбыҙ атамалары йәш быуынға үҙгәрешһеҙ тапшырылырға тейеш...

Фәүзил Маликов әйтеүенсә, улар иҫтәлекле урындарға мәғлүмәт таҡталары ҡуйыу буйынса эш алып бара. Мәҫәлән, Аҡбуҙат һәйкәле янында башҡорт, рус һәм инглиз телдәрендә "Урал батыр" эпосынан мифик ат тураһында һөйләүсе стенд тора. Уҙған миҙгелдә тағы бер стенд Аҡбулат мәмерйәһе янында ҡуйылды, унда туроператорҙар ихтыяры менән оҙаҡ ваҡыт "Әкиәт мәмерйәһе" тип яҙып ҡуйылғайны.

Туроператорҙар тарихты баһалаусыларҙы берләштереү инициативаһын төбәктең мәҙәни һәм тәбиғи мираҫын һаҡлауҙа мөһим аҙым тип атаны. "Бөгөн иҫтәлекле урындарҙың боронғо атамаларын һаҡлау ысынлап та бик мөһим икәнен аңларға кәрәк. Тарихты үҙгәртергә ярамай, уны нисек бар, шулай итеп тапшырырға кәрәк. Бөрйән районы уникаль тәбиғәт һәм мәҙәни ресурстарға эйә, был уны туристар өсөн ҡыҙыҡлы итә. Был үҙенсәлекте һаҡлап ҡалырға кәрәк", - тип билдәләне ҡатнашыусылар.

Ҡатнашыусылар араһынан Динар Байегетов, тыуған төбәгебеҙ, илебеҙ буйлап сәйәхәт итергә, урындағы халыҡтың мәҙәниәте һәм йолалары тураһында белергә теләүселәр күбәйә, тип билдәләне. Уның һүҙҙәренсә, туризмды һәм ҡунаҡсыллыҡты үҫтереү өсөн сервис һәм инфраструктураны үҫтереү генә түгел, шулай уҡ халыҡтың рухи мираҫын лайыҡлы күрһәтергә әҙер булырға кәрәк. Гөлдәр Ҡолдыбаеваны туроператорҙар йыш ҡына туристарға тәбиғәт объекттары менән бәйле легендалар тураһында һөйләргә саҡыра. Ул, тәү сиратта, ҡунаҡтарҙы ҡабул итеүселәр мәғлүмәтле булырға тейеш, ти. "Беҙҙең районға килгән туристар ҙа, туризм менән шөғөлләнергә ҡарар итеүселәр һаны ла арта. Беҙгә тыуған яҡты өйрәнеү материалдарын берләштерергә һәм системалаштырырға кәрәк. Туроператорҙар мираҫты һаҡлауҙа һәм популярлаштырыуҙа төп роль уйнай, сөнки туристарға мәғлүмәт йыш ҡына уларҙан ситкә китә. Мәҫәлән, районда бөтәһенә лә билдәле Инсебикә ҡаяһы бар. Беҙҙең быуын һәйкәлдең легендаһын бик яҡшы белә һәм был белемде балаларына тапшыра. Ә туристар, ҡая янында яңы ғына һәләк булған ҡыҙ хөрмәтенә ҙур булмаған иҫтәлекле стеланы күреп, тәбиғәт ҡомартҡыһын еңел генә Гөлнара ҡаяһы тип үҙгәртә. Тимер ауылынан һуң йылғала аҡҡанда беҙ Сыбар-Айғыр, Боһондо туғайы, Тимер шарлауығы эргәһенән үтәбеҙ. Шулай итеп, шарлауыҡты Кавказдағы шарлауыҡҡа оҡшаш тип, унда "Ҡыҙҙарҙың күҙ йәштәре" тип яҙып ҡуялар", - тип проблеманы билдәләне Гөлдәр Ҡолдыбаева.

Райондың тыуған яҡты өйрәнеү ойошмаһы етәксеһе Дамир Аллабирҙин күп нәмә бөрйәндәрҙең үҙҙәренә бәйле, тип билдәләне һәм районда аншлагтарҙы бергәләп тикшереп, төҙәтеү өсөн комиссия булдырырға тәҡдим итте. Уның фекеренсә, тәбиғәт ҡомартҡыларына баннерҙар ҡуйыу һәм туроператорҙар аша брошюралар таратыу кәрәк, шулай иткәндә легендаларҙы уйлап сығарып булмаясаҡ.

Гид Егор Почуев бөтә мәғлүмәт ике телдә: башҡорт һәм рус телдәрендә булырға тейеш, тип иҫәпләй. Шулай уҡ уның билдәләүенсә, технология осоронда үҫеп килгән быуынға мәғлүмәтте уйындар йәки ҡушымталар аша, бәлки, иҫтә ҡалырлыҡ персонаждар менән һәм шул уҡ ваҡытта транскрипция менән милли исемдәрҙе күрһәтеп тапшырыу тураһында ла онотоорға ярамай.

Төбәктең иҫтәлекле урындарының боронғо атамаларын боҙоп күрһәтеү йәки алмаштырыу менән бәйле проблемаларҙы урындағы тыуған яҡты өйрәнеүсе, педагог Баязит Йәғәфәров халыҡтың тарихи белеме етмәү менән бәйләй: "Беренсенән, был мәктәп программаһындағы етешһеҙлек. Тыуған яҡты өйрәнеүгә иғтибар һәм уҡыу ваҡыты бик аҙ бирелә. Икенсенән, муниципалитет масштабында тарихи хәтерҙе һаҡлау буйынса аныҡ эш программаһы юҡ, шулай уҡ урындағы тыуған яҡты өйрәнеүселәрҙең ғәмәлдәренең фактик тарҡаулығы ла бар. Кем әйтмешләй, һәр кем үҙ ҡаҙанында ҡайнай. Ҡайһы бер тарих уҡытыусылары был мөһим эштән бөтөнләй ситтә тора. Мәҫәлән, ҡасандыр Алағуян тамағы тип аталған ауыл хәҙер Иҫке Собханғол ауылы, Сейәле тау Дауахана тауы тип йөрөтөлә", - тип билдәләй ул һәм боронғо атамаларҙы популярлаштырыу өсөн үҙенең боронғо атамаларын юғалтҡан йәки юғалтыу ҡурҡынысы аҫтында булған тәбиғәт ҡомартҡылары реестрын төҙөргә, эскиздар эшләргә һәм объекттарҙың ҡыҫҡа тарихы һәм боронғо атамалары күрһәтелгән иҫтәлекле билдәләр ҡуйырға, белешмә әҙәбиәт баҫтырырға тәҡдим итә.

- Шулай уҡ риүәйәттәрҙе һәм легендаларҙы, йылғаларҙың һәм күлдәрҙең боронғо атамаларын популярлаштырыуҙа туроператорҙарҙың ҡатнашыуы мөһим. Туристик гидтарҙы һәм йылға буйынса ағып төшөү инструкторҙарын әҙерләү программаһына тыуған яҡтың топонимикаһын, легендаларын һәм риүәйәттәрен мотлаҡ өйрәнеүҙе индерергә кәрәк. Башҡорт мираҫын һаҡлау өсөн урындағы власть органдары вәкилдәрен, тарих һәм башҡорт теле уҡытыусыларын, йәмәғәт берләшмәләре вәкилдәрен һәм был проблема менән шөғөлләнеүсе айырым кешеләрҙе йәлеп итеп, комплекслы эш программаһын әҙерләргә кәрәк. Төрлө күмәк саралар үткәргәндә мотлаҡ милли үҙенсәлектәрҙе иҫәпкә алыу мөһим. Муниципаль бюджетта тыуған яҡты өйрәнеү эшмәкәрлегенә сығымдар статьяһы булырға тейеш, - тип иҫәпләй Баязит Йәғәфәров.

**ШУЛАЙ ИТЕП...**

**Ойоштороусылар фекеренсә, туризм үҫешкән бөтә райондарҙа ла мираҫты һаҡлау темаһы бар. Был сарала ҡатнашыусылар ошо темаға һөйләшеүҙе башлап ебәрҙе, топонимик тикшеренеүҙәр материалдары буйынса брошюралар, шулай уҡ райондың иҫтәлекле урындары һәм уларҙың легендалары күрһәтелгән берҙәм туристик карта булдырырға һәм таратырға ҡарар итте.**

**Айгөл ШӘРӘФЕТДИНОВА.**

✓ ***Кешенең күпте кисереүе һәм барыһына ла күнегеүе билдәле. Ләкин иң ҡыйыны - тәүге һынауҙы, беренсе һыҙланыу тойғоһон кисереү, сөнки һыҙланыу ваҡыт үтеү менән генә баҫыла һәм үҙенә күнектерә.***



*МОСОЛМАН ӘҘӘБЕ*

# ЫСЫН САБЫРЛЫҠ ШУНДАЙ



Шундай хәҙис бар. Бер ваҡыт Аллаһ Илсеһе (с.г.с.) ҡәбер янында күҙ йәштәрен түгеп ултырған ҡатын янынан үтеп барған. Ҡатындың хәлен күреп, уға:

- Аллаһтан ҡурҡ һәм сабыр ит! - тигән. Бәйғәмбәрҙе танымайынса, ҡатын:

- Кит янымдан, мин кисергәнде һинең кисергәнең юҡ бит әле! - тип ҡысҡырып ебәргән.

Әңгәмәсенең Бәйғәмбәр булғанын әйткәстәр генә ҡатын Аллаһ Илсеһе артынан тороп йүгерә һәм:

- Мин Һеҙҙе танымаһым! - тип ғәфү үтенә.

- Ысын сабырлыҡ тәүге тетрәнеүҙә! - тип яуап бирә Бәйғәмбәр.

Хәҙистә телгә алынған ҡатындың исеме билдәле түгел, әммә риүәйәттәрҙән аңлашылыуынса, ул үҙ балаһының ҡәбере янында илай. Алдында Бәйғәмбәр торғанын белмәгәнгә, ул уға тауыш күтәрә. Әлбиттә, бер мосолман да эргәһендә Бәйғәмбәр булғанын күрә тороп, уға ундай һүҙҙәр әйтмәҫ ине. Ҡатындың ҡысҡырыуына Аллаһ Илсеһе бер ни ҙә өндәшмәй, үҙ юлында була: йәнә һүҙ ҡушһа, яуап тағы ла тупаҫыраҡ яңғырар, ә ҡатын үҙе унан да ауыр, хәүефле хәлгә ҡалыр ине.

Сәхәбәләрҙең береһе, ҡатындың аңһыҙ хата ҡылыуын күреп, унан һорай: "Һине түҙемлеккә һәм Хоҙайҙан ҡурҡырға саҡырған кешенең кем икәнен беләһеңме?" "Юҡ", - тип яуап бирә ҡатын һәм эргәһендә Аллаһ Илсеһе булғанын белеп, уның артынан ғәфү үтенергә ашыға. Бәйғәмбәр нәсихәт итеп ҡатынға ысын сабырлыҡтың нимә икәнен аңлата. Сабырлыҡ - тәүге тетрәнеүҙә, тигәнен шулай аңларға кәрәк: ҡайғының тәүге минуттарынан уҡ түҙемлеккә эйә булыу.

Кешенең күпте кисереүе һәм барыһына ла күнегеүе билдәле. Ләкин иң ҡыйыны - тәүге һынауҙы, беренсе һыҙланыу тойғоһон кисереү, сөнки һыҙланыу ваҡыт үтеү менән генә баҫыла һәм үҙенә күнектерә. Кешенең ҡайғы менән һынауға әҙер булмауы тағы ла ҙурыраҡ фажиғәгә, зиһене томаланыуына йәки үҙ-үҙенә ҡул һалыуға килтереүе ихтимал.

Үлем менән йөҙгә-йөҙ осрашҡанда - сабырлыҡтың иң күркәм сағы, шул ваҡытта мосолмандың ысын иманы күренә. Кешеләрҙең яҡындарын юғалтҡанда һыҡтау, ҡысҡырыу, илауҙары бер кемгә файҙа килтермәй. Ындай ҡайғылы мәлдәрҙә булғанды ҡабул итеп кенә ҡотолоу юлын табырға мөмкин. Кире осраҡта кешегә хәүеф янай, сөнки тыйылған һүҙҙәр әйтеп, ул Бәйғәмбәргә, хатта Аллаһҡа ҡаршы сығыуы бар. Кеше ихтыярын юғалтҡанда әйткән һүҙҙәренә, ҡылған эштәренә яуап бирерлек түгел. Ысын мосолман, яҡындары фажиғәгә тарығанда, "Иннә лилләһи үә иннә иләйһи раджиун"(Беҙ Аллаһтыҡы, һәм Уға ҡайтабыҙ) тигән һүҙҙәрҙе телгә алып, үҙен тотанаҡлы торорға тейеш.

***Хәҙистән һабаҡтар:***

***- Яҡшылыҡҡа өндәгәндә ҡаршылыҡтарға һәм ризаһыҙлыҡҡа әҙер булырға кәрәк.***

***- Ҡәбергә килеү рөхсәт ителгән, ә ҡәбер өҫтөндә үлгән кеше өсөн янып көйөү, өҙгөләнеүҙе динебеҙ тыя.***

*УҢЫШ ҠАҘАН*



# ИЗГЕЛЕК ҺӘМ ГҮЗӘЛЛЕК ТУРАҺЫНДА ХАТТАР

### Утыҙ һигеҙенсе хат: "Баҡсалар һәм парктар"

Баҡса-парк сәнғәте - бөтә сәнғәттәр араһында маҡыктырғысыраҡ һәм кешегә көслө тәьҫир яһаусы. Тәү ҡарамаҡҡа былай тип иҫбатлау сәйерерәк тойолор. Бының менән ризалашыуы ауыр кеүек. Ысынлап та, ни өсөн әле баҡса-парк сәнғәте шиғриәттән, дөйөм алғанда, әҙәбиәттән, философия, театр, живопись һ.б. ҡарағанда тәьҫирлерәк булырға тейеш? Әммә уйлап ҡараһаҡ һәм барыбыҙға ла ҡәҙерле тарихи парктарҙы, хатта тәртипкә килтерелмәгәндәрен дә, барып күргәндән һуң алған тәьҫораттарыбыҙҙы хәтергә төшөрөгөҙ әле.

Һеҙ паркка ял итер өсөн бараһығыҙ - бер ниндәй ҡаршылашыуҙарһыҙ тәьҫораттарға бирелер, яҙ йәки көҙ, сәскәләр йәки үлән еҫе аңҡып торған таҙа һауаһын һуларға. Парк һеҙҙе ялмап ала. Парк һәм һеҙ бер-берегеҙгә асыҡ, ул һеҙгә янынан-яны күренештәр аса: аҡландар, боскеттар, аллеялар - йөрөгәндә паркка үҙен күрһәтеүҙе енеләйтәһегеҙ. Тирәяҡта тынлыҡ, ошо тынлыҡта алыҫта яҙғы япраҡтарҙың шауы йәки аяҡ аҫтына ҡойолған көҙгө япраҡтарҙың ҡыштырлауы айырыуса асыҡ ишетелә, йәки ҡоштар һайрауы, яҡында ғына ботаҡ һынған тауыштар, ниндәйҙер башҡа тауыштар алыҫтарҙан килеп ишетелә һәм үҙенсәлекле бер киңлек һәм сикһеҙлек тойғоһон уята. Барлыҡ тойғоларығыҙ тәьҫораттарға асыҡ һәм уларҙың алмашыныуының үҙенсәлекле симфонияны - һауа, ел, томан, ысыҡ менән килгән төҫтәр, күләмдәр, тауыштар һәм хатта тойғоларҙы хасил итә.

"Әммә бында кешенең ни ҡыҫылышы бар?" тип һорарҙар минән. Сөнки был бит һеҙгә тәбиғәт биргән, һеҙ паркка ҡарағанда урманда, тауҙа, диңгеҙ буйында тағы ла көслөрәк тоя алған нәмә.

Юҡ, баҡсалар һәм парктар - кеше һәм тәбиғәт берләшкән мөһим сик. Баҡса һәм парктар берҙәй мөһим - ҡалала ла, унан ситтә лә. Беҙҙең туған Мәскәү эргәһендә ғәжәйеп парктар юҡҡа ғына күп түгел. Кешенекен - тәбиғәтҡә, ә тәбиғәтте "кулынан тотоп" кеше йәмғиәтенә индереүҙән дә мауыҡтырғыс, тулҡынландырғыс нәмә юҡ: ҡарағыҙ, һоҡланығыҙ, ҡыуанығыҙ.

Һәм тәбиғәт ҡырағайыраҡ булған һайын, унын кеше менән берләшмәһе көслөрәк, тәрәнерәк. Быға ни өсөн Алупкалағы Воронцов төҙәткән Ҡырым паркы һәм Выборгтағы Николаиларҙың барондар имениеһындағы "Мон репо" паркы ("Минең ялым") шундай иҫ киткес йоғонто яһай. Алупкала парк өҫтөнән тауҙар өймәкләшеп "үҙҙәрен күрһәтеп" тора, ә парктан аҫта гигант таштарға Ҡара диңгеҙ тулҡындары бәрелә. "Мон репо" паркында яланғас ҡыҙыл ҡаяларҙа ҡарағайҙар үҫә, зәңгәр һыуҙа йөҙгән утрауҙары менән икһеҙ-сикһеҙ күренештәр асыла.

Әммә ике паркта ла тәбиғәттең мөһабәтлегенә ҡарамаҫтан, кешенең аңлы ҡулы тейеүе күренә һәм хужаларҙың ҡотло һарайҙары ландшафттың кеше саф ҡырағайлығын ослап ҡуя.

Юҡҡа ғына Петр ҙа диңгеҙҙе үҙенең ҡала ситендәге парклы һарайҙарына - Яңы Петергоф, Стрельня, Ораниенбаумға каналдар менән яҡынайтмаған. Каналдар һарайҙарҙы һәм парктарҙы диңгеҙ менән һыу аша ғына бәйләмәгән, һауанан да тоташтырған - һәм диңгеҙ һыуын ағастар, Петр яратҡан хуш еҫле сәскәләр араһында йөрөткән.

**Дмитрий ЛИХАЧЕВ.**

*ҮӘТ, ШУЛАЙ!*

# БЕРСӘ ЙЫЛЫТА, БЕРСӘ...



**Ғасыр аҙағына Ерҙәге кешеләрҙең ике тапҡырға күберәгә киҫкен температура үҙгәрештәренән даими зыян күрәсәк, тип хәбәр итә ТАСС.**

Климатологтар фекеренсә, һуңғы илле йылда Ерҙең 60 проценты биләмәһендә температура һикереү осраҡтары нык артҡан. Ғалимдар 2100 йылға ошондай һауа торошо аномалиялары тағы ла 6-8 процентҡа үҫәсәк, тип фаразлай.

Ҡытай климатологтары компьютер моделе буйынса, температура һикереүҙәренән күп кенә үҫешкән илдәр зыян күрәсәк. Айырыуса Сахаранан көньяҡтараҡ Африка илдәрендә һәм Латин Америкаһы илдәрендә был аномалиялар бөгөнгөгә ҡарағанда халыҡҡа 4-6 тапҡырға күберәк тәьҫир итәсәк.

Йылынан һыуыҡҡа кәсеү кеше һәм тәбиғәт өсөн насар - организм экстремаль әҫелеккә йәки һыуыҡҡа яраҡлашырға өлгөрмәй. Һуңғы йылдарҙа Ерҙә ҡоролоҡ, эҫе тулҡындар һәм башҡа экстремаль һауа күренештәре йышайҙы, миллионлаған хайуандар һәләк булды, ҙур урман майҙандары юҡҡа сыҡты.

Былдай климат аномалиялары, табиптар күҙәтеүенсә, үлем осраҡтарының, йөрәк-үпкә сирҙәренең артыуына килтерә.

Ғалимдар, парник газдары сығымын кәметмәһәк, хәл тағы ла насарланасаҡ, тип иҫкәртә.

**Гөлфиә АКУЛОВА.**

*ФӘҺЕМ*

# ӘСӘ ҠАРЫНЫНДАҒЫ ӘҢГӘМӘ

Ауырлы ҡатындың ҡарынында ике бәпес һөйләшә, ти. Береһе - иманлы, икенсеһе - иманһыҙ. Иманһыҙы иманлыһынан:

- Яҡты донъяға тыуғандан һуң ғүмер барлығына ышанаһыңмы?- тип һорай икән.

- Әлбиттә. Яҡты донъяға тыуғандан һуң ғүмер бар икәнен бөтәһе лә белә. Аҙаҡтан көслө һәм һынауҙарға әҙер булыр өсөн беҙ - бында, - ти иманлы бәпес.

Тегеһе:

- Был йүләрлек. Аҙаҡтан бер ниндәй ғүмерҙең булыуы мөмкин түгел. Ул ғүмерҙе күҙ алдына килтерәһеңме һуң?

- Тулыһынса күҙ алдына килтермәйем. Әммә унда яҡтылыҡ күберәк буласаҡ, һәм беҙ унда атлап йөрөй аласаҡбыҙ, үҙ ауыҙыбыҙ менән ашай аласаҡбыҙ, тип ышанам.

- Буш һүҙ. Үҙебеҙ йөрөй ҙә, ашай ҙа алмайбыҙ. Беҙҙе кендек туҡландыра. Беҙҙең ғүмер ҙә - кендек, башҡаһы юҡ.

- Ә мин бар тип ышанам. Тик ул ғүмер икенсерәк буласаҡ.

- Ләкин унан бит әле бер кем дә ҡайтмаған. Ғүмер яҡты донъяға тыуғандан һуң тамамлана. Һәм, ғөмүмән, ғүмер интегеүҙән һәм ҡараңғылыҡтан ғына тора.

- Юҡ! Юҡ! Яҡты донъяға тыуғандан һуң беҙ әсәйҙе күрәсәкбеҙ һәм ул беҙҙең хаҡта хәстәрләйәсәк.

- Әсәйҙе? Һин әсәйгә ышанаһыңмы? Ҡайҙа һуң ул?

- Ул тирә-яғыбыҙҙа. Беҙ унын эсендә көн күрәбеҙ. Ул булғанға хәрәкәт итәбеҙ һәм йәшәйбеҙ. Унһыҙ беҙ ҙә булмаҫ инек.

- Был мәғәнәһеҙлек. Мин бер ниндәй ҙә әсәй күрмәнем, тимәк, ул юҡ. Иманлы бәпес:

- Мин һинең менән ризалаша алмайым. Ҡайһы ваҡыт унын йырлағанын ишетергә һәм беҙҙе һыйпағанын тойорға була. Ысын ғүмеребеҙ яҡты донъяға тыуғандан һуң ғына башланасаҡ, тип нык ышанам. Ә һин?..

✓ *Ҡайһы берәүҙәр асылы менән түгел, атамаһы менән генә кеше тип нарыҡлана.*

*(Цицерон).*



БАШ ЭШЛӘТМӘК

# САЛАУАТТЫҢ ТЫУҒАН КӨНӨНӘ АРНАЛА



## Тере Салауатыбыҙ!

*Бөтөп бара, имеш, тиҙәр,*
*Һеҙҙең башҡорт затығыҙ.*
*Бары ташҡын ғына, тиҙәр,*
*Һеҙҙең Салауатығыҙ.*
*Алдай улар, ышанмағыҙ,*
*Тере Салауатыбыҙ!*
*Имән ағасындай ныҡлы*
*Беҙҙең башҡорт затыбыҙ!*
*Беҙҙең күңелдәрҙә йәшәй*
*Уның рухы, булмышы.*
*Ул бит Тыуған илкәйемдең*
*Тынмас һайрар бер ҡошо.*

*Гөрләп сәскә ата бөгөн*
*Башҡортостан-йортобоҙ.*
*Беҙҙең йөрәктәрҙә йәшәй,*
*Йәшәр, Салауатыбыҙ!*
*Теләһәгеҙ, йөрәгемә*
*Мылтыҡ терәп атығыҙ!*
*Үлгәндә лә ҡабатлармын-*
*Тере Салауатыбыҙ!*

**Рамай ҠАҺИР,**
**РФ һәм РБ Яҙыусылар союзы ағзаһы.**
**Учалы районы.**




**Фәүзиә ИҘЕЛБАЕВА төҙөнө.**

**22-се һандағы сканворд яуаптары.**

**Горизонталь буйынса:** Комендант. Гроссмейстер. Наркоз. Апорт. Белем. Ҡандала. Залим. Ғәйбәтсе. Ғаилә. Балалайка. Мумия. Йылтырма. Аса. Аҡса. Мәк. Аласабыр. Плагиатор. Аҡҡош. Һандуғас. Сәғәт. Тары. Группа. Бәрәңге. Етегән. Умарта. Аҡтатыр. Рейд. Елләткес. Игрек. Мәскәй. Лесото. Миғраж. Ахун.

**Вертикаль буйынса:** Аҙап. Ҡултамға. Ғауға. Климат. Драма. Таба. Ҡорт. Гонг. Бағана. Рашҡы. Әтрәгәләм. Көсөк. Емдек. Зәмзәм. Ерек. Морж. Асыл. Селбәрә. Сана. Астрономия. Елек. Турғай. Аллаһ. Сәйгүн. Ысул. Ангина. Батмус. Дәһшәт. Аңҡау. Ромб. Ғиззәт. Авария. Сынйыр.

СӘНҒӘТ КӨНДӘЛЕГЕ

## М.Ғафури исемендәге Башҡорт дәүләт академия драма театры

**14 июнь "Мөхәббәт ҡоштары"** (И. Йомағолов, Ф. Ғарипов), музыкаль комедия. 16+
**16 июнь "Ҡара йөҙҙәр"** (М. Ғафури, А. Абушахманов, инсц. Ш. Ғилманова). 16+
**17 июнь "Йырланмаған йырым һин"** (В.Исхаҡов, А. Абушахманов), музыкаль милодрама. 16+
**18 июнь "Һиңнеҙ килгән яҙҙар"** (З. Ҡадырова, А. Абушахманов), мелодрама. 16+
**19 июнь "Килен"** (З. Мусина, Ф. Ғарипов, инсц. З. Бураҡаева), драма. 16+

## М.Кәрим исемендәге Милли йәштәр театры

**13 июнь "Айболит и Бармалей"** (К. Чуковский, Р. Хакимов), мюзикл. 10:30. 0+
**13 һәм 18 июнь "Рассказы Альфии"** (М. Кәрим, М. Кулбаев), бәхетле бала саҡ. 11:30. 6+
**19 июнь "Аҡбуҙат"** (З. Буракаева инц., И. Ҡаҙаҡбаев), фэнтези. 12+

## Башҡорт дәүләт ҡурсаҡ театры

**13 июнь "Коза - дереза"** (М.Супонин). 12:00 һәм 15:00. 0+
**14 июнь "Гуси-лебеди".** 12:00 һәм 12:00 һәм 15:00. 0+
**15 июнь "Два кота"**, башҡорт халыҡ әкиәте. 12:00 һәм 15:00. 0+

## Салауат дәүләт башҡорт драма театры

**16, 17 һәм 19 июнь "Светофория - волшебная страна"**, мауыҡтырғыс юл ҡағиҙәләре. 6+

## БР Милли музейы

**13 июнь** Тамбур сигеүе буйынса оҫталыҡ дәресе. 12:00. 6+

ЙӘШЕЛ ДАУА

# КӨНБАҒЫШ

**Күңелһеҙ мәлдәрҙә күптәр ваҡытын көнбағыш сиреп уҙғара һәм бер кем дә унда магнийҙың арыш икмәгенә ҡарағанда алты тапҡыр күберәк булыуы, ҙур күләмдә ҡиммәтле Е витамины тупланыуы тураһында уйланғаны ла юҡтыр. Халыҡ медицинаһында ла дауаланыуҙың тик бер-ике төрө генә билдәле.**

***Анкилоз.*** Өлгөрөп килгән 6 көнбағыш башын алырға, емештәрен таҙалап 1 литр һыуға һалырға. Ҡояшта 40 көн төнәтергә. Көнөнә 3 тапҡыр ашарҙан 20 минут алда 1 ҡалаҡ ҡабул итергә. Быуындар 2-3 айҙан һуң хәрәкәтләнә башлар, шулай ҙа дауаланыуҙы тағы ла дауам итергә кәңәш ителә.

***Вегетатив-ҡан тамырҙары дистонияһы.*** Сәскә атҡан ваҡытында көнбағыш һабағын алырға, ваҡлап турарға, киптерергә. Бер стакан ҡайнар һыу ҡойоп, 20 минут төнәтергә. Һарҡытырға. Был төнәтмә ҡан тамырҙарын таҙарта, баш һәм нервы ауырыуҙарын баҫа.

***Бөйөр-таш ауырыуы.*** 3-4 көнбағыш тамырын ваҡларға. 1 стакан иҙмәгә 3 литр һыу ҡойорға, 3 минут бешерергә. Һарҡытырға, ләкин тамырҙарын ташламаҫҡа. 3 тәүлектә бөтә төнәтмәне эсергә (көнөнә 1 литр). Ошо уҡ тамырҙарҙы тағы ла 3 литр һыу ҡойоп, 15 минут бешерергә. Һарҡытырға, ә тамырҙарын ташларға. Төнәтмәне өс көндә эсергә. Был төнәтмә бөйөрҙән таш ҡыуыуҙа ныҡ ярҙам итә.

***Ашҡаҙан яман шеше.*** 1 ҡалаҡ көнбағыштың киптерелгән ситке япраҡтарын алырға. 1 стакан һыу ҡойоп ҡайнатырға, ләкин бешермәҫкә. 1 сәғәт төнәтергә. Көнөнә 3 тапҡыр эҫе көйөнсә ашарҙан ярты сәғәт алда стакандың өстән бер өлөшөн эсергә.

✓ *Кәңәш ул шундай нимә: аҡыллылар уға мохтаж түгел, ә иҫәрҙәр уны файҙаланмай.*

*(Аноним).*



МӘҘӘНИ МАЙҘАН

# ТӨРКИӘЛӘ - ҺАБАНТУЙ!

**Төркиәнең Анталия ҡалаһы Коньяалты районында башҡорт һабантуйы үтте. Ҡунаҡтарҙы Анталия башҡорттары ойошмаһы етәксеһе Азат Шәйхетдинов сәләмләне.**



Анталияла башҡорт һабантуйы бишенсе тапҡыр уҙғарыла һәм ҡатнашыусылар йылдан-йыл күберәк, тип һөйләне Азат Шәйхетдинов. Һабантуй уҙған паркка ингәндә үк милли кейемдәге яҡташтарыбыҙ ҡунаҡтарҙы самауыр сәйе һәм милли ризыҡтар менән ҡаршы алған. Һабантуйҙа Башҡортостан йырсыһы Заһир Иҫәнсурин Анталия башҡорттарына тыуған республикабыҙҙан сәләм тапшыра һәм үҙенең бер нисә йырын башҡара, шулай уҡ ҡумыҙҙа һәм ҡурайҙа уйнап ишеттерә.

Сараны ойоштороусыларҙың береһе, ун йыл Төркиәлә йәшәгән Баймаҡ ҡыҙы, популяр блогер Дилүзә Мәҡсүтова фекеренсә, кеше тыуған иленән ни тиклем алыҫта йәшәй икән, ул үҙенең мәҙәниәтенә, тарихына, йолаларына нығыраҡ тартыла. Бындай байрамдар - ватандаштар менән осрашыу ғына түгел, ә тыуған телдә аралашыу, тыуған республика менән бәйләнештәрҙе нығытыу мөмкинлеге лә.

**Әлфиә ӘҺЛИУЛЛИНА.**

# "ҺОМАЙ" ЙЫРЫ...

**Рәсәй Forbes-ы Башҡортостандан йырсы Адель Шәйхетдинованы "Музыка" номинацияһында "30-ға тиклем 30" рейтингына индерҙе.**

Тауыш биреү өсөн номинанттар иҫәбендә - 30 йәшкәсә профессиональ танылыу яулаған һәм Рәсәй йәки донъяла билдәлелек алған йәштәр. Хәтерегеҙгә төшөрәбеҙ, Ay Yola төркөмөнөң 25 йәшлек йырсыһы Homay хиты менән донъя чарттарында беренсе урындарҙы алды. Яныраҡ Адель "Башҡортостандың атҡаҙанған артисы" тигән маҡтаулы исем менән бүләкләнде. Сайтта яҙыуҙарынса, Адель үҙенең ижад юлын 2010 йылда атаһы Руслан Шәйхетдинов менән Musume проектында башлай. Төркөм ике альбом сығара һәм телевидениела бер нисә шоуҙа ҡатнаша. Шул ваҡытта традицион башҡорт мотивтарын һәм электрон музыканы берләштергән үҙенсәлекле башҡарыу стиле барлыҡҡа килә. 2024 йылда Шәйхетдиновтар Ринат Рамаҙанов менән бергә Ay Yola төркөмөн ойоштора. 2025 йылдың 14 мартында сыҡҡан Homay йыры донъя кимәлендәге хитка әүерелде.

# "ТАВРИДА"ЛА - ЕҢЕҮ

**Башҡорт режиссеры Фәрзәнә Утарбаеваның "Нигеҙ" фильмы Ҡырымда "Таврида. АРТ" Бөтә Рәсәй кинофестивалендә еңеүсе булды.**

Кинофестивалгә 300-ҙән ашыу ғариза килгән. Рәсәй киноһы йөндоҙҙары етәкселегендәге жюри илдең 23 төбәгенән 45 фильмды һайлап алған. Эксперттар һәм почетлы ҡунаҡтар араһында - Светлана Дружинина, Гоша Куценко, Мария Миронова һәм башҡа билдәле артистар. "Фәрзәнә Утарбаеваның фильмы иң яҡшы ҡыҫҡа метражлы уйын картинаһы тип билдәләнде. Был номинацияға 20-гә яҡын кинокартина тәҡдим ителде", - тип белдерҙеләр ведомствола.

Фильмдың режиссеры Фәрзәнә Утарбаева һүҙҙәренсә, наградаһы уға билдәле кинооператор Анатолий Мукасей ("Берегись автомобиля", "Большая перемена", "Гардемарины" һ.б.) һәм "Роднина" фильмында төп ролде башҡарған актриса Влада Самохина тапшырған. "Бик бәхетлемен, тамашасылар ҙа, эксперттар ҙа башҡорт киноһын юғары баһалай. Конкурсанттарҙың фильмды ҡарағандан һуң уға еңеү теләүе, ә еңеүҙән һуң мине ихлас ҡотлау һүҙҙәрен ишетеү икеләтә ҡыуаныслы", - тип шатлығы менән уртаҡлаша Фәрзәнә Утарбаева.

# БАТЫР ҠЫҘҒА АРНАП...

**Салауат башҡорт драма театры 92-се миҙгелен Сәрүәр Суринаның пьесаһы буйынса "Зәйтүнә" спектакленең премьераһы менән тамамланы. Режиссеры - Башҡортостандың атҡаҙанған артисы Рафаэль Ғәйнуллин.**

Реаль хәл-ваҡиғаларға нигеҙләнгән спектакль Миәкә районы ҡыҙы Зәйтүнә Әлбаеваның батырлығы хаҡында һөйләй. Яҡташыбыҙ Бөйөк Ватан һуғышы осоронда үҙ теләге менән Сталинград фронтына юллана. 1942 йылдың 9 августында Зәйтүнә Ҡалмыҡ АССР-ы Садовое ауылы эргәһендәге Песчанка ҡалҡыулығына хәрби дежурға баҫа. Шул көндә ауылға немецтарҙың моторизацияланған разведка отряды бәреп инә. Актриса булырға хыялланған сибек ҡыҙ винтовка һәм 30 патрон тотоп, яҡшы ҡоралланған фашистарға ҡаршы тора. Ул бер аҙым да артҡа сигенмәй. Гитлерсыларҙың береһе уға арттан яҡынлаша һәм автомат менән атып үлтерә. 20 йәшлек Зәйтүнәнең "Ҡыҙҙар, бәхил булығыҙ, Тыуған ил өсөн үләм!" тигән һуңғы һүҙҙәре уның батырлығы һәм илгә тоғролоғо символына әүерелә.

Был тарихты режиссер Рафаэль Ғәйнуллинға Сибай башҡорт дәүләт драма театрының баш рәссамы Валерий Яшкулов һөйләп бирә. "Валерий Борисович 20 йәшлек яҡташыбыҙ Зәйтүнә Әлбаева тураһында гәжәйеп тарих менән уртаҡлашты, - тине режиссер. - Был миндә ҙур ҡыҙыҡһыныу уятты, шуға беҙ уның буйынса спектакль ҡуйырға булдыҡ. Ҡыҙғанысҡа ҡаршы, быйыл Валерий Борисович арабыҙҙан китте, әммә ул постановка эскиздарын эшләргә өлгөрҙө. Һуғыш сыҡмаһа, театр курсы студенты Зәйтүнә бөйөк актриса булыр ине, бәлки".

Былтыр ноябрҙә театр етәкселеге билдәле драматург Сәрүәр Суринанан ошо хаҡта пьеса яҙыуын һорай. Архив материалдары, тыуған илендә эҙләнеү эштәре һәм туғандарының тырышлығы менән Зәйтүнә Рәхмәтулла ҡыҙы Әлбаеваның исеме билдәле булды. Әле тормош иптәше менән Германияла йәшәгән туғаны Зәйтүнә Аретколованың ныҡышмалылығы һөҙөмтәһендә батыр яҡташыбыҙҙың ерләнгән урынын табыуға һәм исемен тыуған иленә ҡайтарыуға өлгәшелә. Премьераға Зәйтүнә Әлбаеваның туғандары һәм "Миәкә хәтере" эҙәрмәндәр отряды етәксеһе Вильсур Нафиҡов килә, ул республика һәм Ҡалмыҡстан архивтары менән бергә героинябың һөлдәһен эҙләү менән шөғөлләндә.

*ТЕЛҺӨЙӘР*

# НӘКӘҪ АСЫЛЫНАН ҠАСЫР

**"Матур башҡорт теле". Тыуған телебеҙҙе һаҡлауға һәм үҫтереүгә арналған бер проект шулай аталғайны. "Тыуған тел" үҙе үк "гәзиз, матур, бай, ҡәҙерле" тигән һәм башҡа иң күркәм сифаттарҙы эсенә ала. Уның байлығын үҙебеҙҙең дә телмәргә йөктороу яҡлыбыҙ. Ҡалын-ҡалын лөғәттәрҙә тупланған һүҙҙәр араһынан онотола биргәндәрен "йәнләндереү" ҙә шуға ҡеүәт бирер.**

**Нәҙберек.** 1. Нескә, һиҙгер. *Күңелем бик нәҙберек. Музыканттың бармаҡтары нәҙберек була инде.* 2. Аш-һыуға, ризыҡҡа бик айырып ҡараған. *Нәҙберек ҡыҙ. Артыҡ нәҙберек булма.*

**Нәҫ.** Ялҡаулыҡ була "нәҫ". *Нәҫ баҫыу. Нәҫте енеү.*

**Нәкәҫ.** 1. "Яй, ауыр ҡуҙғалыусан" мәғәнәһендәге һүҙ. *Нәкәҫ ат. Нәкәҫ әҙәм.* 2. Тағы бер мәғәнәһе - "әшәке/кәбәхәт". *Нәкәҫ асылынан ҡасыр (мәҡәл).*

**Оҙаныу.** Нимәгәләр тиклем һуҙылыу, барып етеү була оҙаныу. *Иген баҫыуы урманғаса оҙанған. Һуҡмаҡ йылғаға тиклем оҙана.*

**Өйәр.** Ямғыр йә ҡар һыуынан хасил булған ағым, гөрләүек. *Көслә ямғырҙан һуң , өйәрҙәр гөрләп аҡты.*

**Шулай итеп, был һүҙҙәрҙе нәҙберек тел хәтере тиҙерәк һеңдерһен.**

**НУРБИКӘ әҙерләне.**

АҠЫЛ-ҠАҘНА



**Аҡыллы кешеләрҙең һүҙҙәренә әйәреп, донъяуи хәҡиҡәткә баҡ, һығымталар яһа һәм, әлбиттә, тормошта ҡуллан. Бәхетле һәм уңышлы кеше булыр өсөн.**

# ЙӨҘ ҠАТ ӘЙТКӘНСЕ...

## бер ҡат эшләп күрһәт

Ауыл тулы туғаның булғансы, ауыл һайын берәр булһын.

**(Башҡорт халыҡ мәҡәле).**

Ҡартлыҡта дуҫтар артмай, был ваҡыттағы юғалтыуҙарҙы кире ҡайтарып булмай.

**(Маркиз де Вовенарг).**

Бурысыңды атҡарыуҙан да юғарыраҡ бөйөклөк тә, шатлыҡ та юҡ.

**(Эрнст Ренен).**

Ҡайһы береүҙәр асылы менән түгел, атамаһы менән генә кеше тип нарыҡлана.

**(Цицерон).**

Дуҫлыҡ "тейешһең" тип талап итмәй, мөмкин булғаны менән ҡәнәғәтләнә.

**(Аристотель).**

Ҡатын-ҡыҙҙың көсө ирҙәрҙең көсһөҙлөгөндә.

**(Вольтер).**

Кәңәш ул шундай нимә: аҡыллылар уға мохтаж түгел, ә иҫәрҙәр уны файҙаланмай.

**(Аноним).**

Аҡыллы йөҙ менән ахмаҡ эштәр эшләгән мәлдә һинең түбәнгә тәгәрәүең башлана ла инде.

**(Ханс Мозер).**

**Шулай итеп, тағы бер аҡыл: "Бер ҡарттың өлкән улы өйләнеп, башҡа сығып йәшәй башлайҙар. Бер саҡ улы ата-әсәһенең хәлен белергә килә. Атаһы менән әсәһенең йәшәйеше шул тиклем күңелһеҙ тойола йәш кешегә һәм ул байтаҡ ваҡыт уларға йәлләп ҡарап ултыра. Ул үҙенең күләше менән ярашып туя алмауын, һәр саҡ бер-береһенең ҡулдарынан ғына тотошоп, етәкләшеп йөрөүҙәрен, бер-береһенә әленән-әле мөхәббәт һүҙҙәре еткереүҙәрен иҫенә төшөрә. Шунан атаһына былай ти:**

**- Атай, ни өсөн һеҙ әсәйем менән бер-берегеҙгә һөйөү һүҙҙәре һөйләмәйһегеҙ? Шул тиклем күңелһеҙ йәшәйһегеҙ. Мин һеҙҙең дә беҙҙең кеүек бер-берегеҙҙе яратыуығыҙҙы, бәхетле булыуығыҙҙы теләйем...**

**- Әй, улым, - ти атай кеше, -һинең мөхәббәтең бала йәшендә генә бит әле, ул йылдан-йыл үҫер, өлкәнәйер, яңы һүҙҙәр өйрәнер, яңы мөнәсәбәттәргә яраҡлашыр. Мәсәлән, мин әсәйеңдең күршеләр менән сираттағы тапҡыр талашып ҡайтып, уларға зарлана башлауын тыңлайым да, "Мин һине ҡалай яратам" тип уны бүлдерә һалам. Миңә балыҡ тота торған ауымды тегергә ярҙам иткәндә "Эй, ҡартыҡайым, яратам да инде үҙеңде", тигән һүҙҙәрҙе әсәйең дә әйтә. Ау тегергә яратмағанын беләһең бит һин уның..."**

"Киске Өфө" гәзитен ойоштороусы:
**Өфө ҡалаһы ҡала округы хакимиәте**
Гәзит Киң коммуникация, элемтә һәм мәҙәни мираҫты һаҡлау өлкәһен күҙәтеү буйынса федераль хеҙмәттең Башҡортостан Республикаһы идаралығында теркәлде.
Теркәү таныҡлығы
№ТУ 02-00001, 10 июнь 2008 йыл.

Баш мөхәррир:
**Гөлфиә Гәрәй ҡыҙы ЯНБАЕВА.**
Мөхәрририәт:
Рәсүл БАЙГИЛДИН, Әхмәр ҒҮМӘР-ҮТӘБАЙ, Фәүзиә МӨХӘМӘТШИНА, Артур БАТЫРШИН.

Редакция һәм нәшер итеүсе адресы:
**450005, Башҡортостан Республикаһы, Өфө ҡалаһы, Революцион урамы, 167/1**
Беҙҙең сайт: **www.kiskeufa.ru**
E-mail: **kiskeufa@mail.ru**
ЯСЙ "СПУТНИК-ЮГ" типографияһында баҫылды. Тел.: 8 (967) 744-77-33. (453400, БР, Дәүләкән ҡалаһы, Мәжит Ғафури ур., 4 й., 203 офис).

**Телефондар:**
Баш мөхәррир 253-25-44
Хәбәрселәр 252-39-99
Матбуғат таратыу 252-39-99

**Ҡул ҡуйыу ваҡыты -**
11 июнь 17 сәғәт 00 мин.
Ҡул ҡуйылды - 14 сәғәт 30 мин.

«Киске Өфө»нөң реклама хеҙмәте **253-25-44** телефоны буйынса «Киске Өфө» гәзитенә ойошмаларҙан һәм айырым кешеләрҙән рекламалар ҡабул итә.

«Киске Өфө»нөң индексы – **ПР905**

Тиражы - 2857
Заказ - 1112